✓ ***"Мин халҡымдың бөйөк эштәрҙән, уй-фекерҙәрҙән, хыял-ынтылыштарҙан уратылған йоморо йомғаҡтай булып, атай-олатайҙарыбыҙҙың быуаттарҙан килгән тәжрибәһен, донъя цивилизацияһының, шул иҫәптән, әлбиттә, урыҫ мәҙәниәте аҡылын һәм рухын үҙенә туплаған йоморо йомғаҡтай булып, тирә-яҡты яҡтыртып һәм ошо яҡтылыҡты башҡаларға өләшеп, иге-сиге күренмәҫ юлдан алға барыуы хаҡында хыялланам. Иншалла, шулай булһын!"***

***Мостай КӘРИМ, Башҡортостандың халыҡ шағиры.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25 - 31 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2014 йыл

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№43 (617)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Мостай Кәрим һүҙе...**

ике ярҙы, ике донъяны тоташтырып тора һаман



4

**Һаман да шул...**

етлекмәгән кейәүҙәр тураһында



6

**Башҡорт илһөйәрҙәре...**

Ҡырымда ла башҡорт булып йәшәй



8-9

**Хәйбуллаға барып күрегеҙ...**

ата-бабалар көнитмешен сағылдырған тамашаларҙы



11

14 **ТВ-программа**


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Ошо көндәрҙә Бөтөн донъя экономиялау көнө билдәләнә. Ошоға бәйләп, һаҡсыллыҡ яҡшы сифатмы, тигән һорау бирге килә...*

***Фаягөл ҒӘЛИМЙӘНОВА, хеҙмәт ветераны:*** Бөгөнгө көндә һаҡсыл булмаһаң, йәшәп ҡара! Хәйер, һәр кемебеҙгә фарыз был сифатты заманыбыҙға ҡарата ҡулланыу, берҙән, дөрөҫ тә булып етмәҫ. Ниндәй дәүерҙә йәшәүеңә ҡарамаҫтан, һаҡсыллыҡ бер ҡасан да зыян итмәй инде ул. Халҡыбыҙ борон-борондан ер-һыуына, тәбиғәт байлыҡтарына, ейгән ризығына ҡарата бик һаҡсыл булған. Хатта һыуҙы тәләфләп күп түккеләү ҙә, иҫкергән, тип ризыҡты ташлау ҙа оло гонаһ һанала һәм айырыуса өлкән быуын кешеләрендә бындай ҡараш әле лә йәшәй, тик йәштәребеҙ генә был хаҡта онотоп ебәргеләй. Сүп-сар контейнерында йыш күрергә тура килгән ризыҡ төрҙәре, бигерәк тә тотош буханкаһы менән ташланған икмәкте күреү бик ауыр миңә. Икмәкте ташлау түгел, валсығын да иҙәнгә төшөрмәй ашарға ҡуша торғайны әсәйебеҙ. "Ризыҡты тәләфләмәгеҙ, кейәһе етер", ти ине ул һәр саҡ. Икмәкте самалап алыуҙың, артып ҡала икән, шөкәрә итеп киптереүҙең бер ҙә ҡыйынлығы ла юҡ та бит... Һуғыш күргән быуындың бөтә нәмәгә һаҡсыл ҡарауын беләбеҙ. "Бөгөнгө көндә..." тип башлағайным һүҙемде. Бөгөн, шөкөр, һуғыш юҡ, әммә әлеге быуын кешеләре барыбер һуғыш шарттарында йәшәгән кеүек тоя үҙен. Әллә көлөп, әллә ысын, беҙҙә пенсионерҙарҙы иң бай ҡатлам тип тә йөрөтәләр-йөрөтөүен (8-12 мең һум пенсия алғандары өсөн). Ә бына яңыраҡ журналист әхирәтемдең, бер ветеран әбей тураһында яҙырға тип барып, үҙ күҙе менән күргәндәрен ғәжәп итеп һөйләгәне һис иҫтән сыҡмай. Пенсияһы 10 меңгә лә тулмай, шуға күрә ул өйҙәге бөтөн ғәмәлен һаҡсыллыҡҡа ҡорорға мәжбүр, ваҡыты менән был һаҡсыллыҡтың абсурдҡа әйләнеүен дә тоймай ул. Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә айлап түгел, сәғәтләп-минутлап арта барған түләүҙәрҙе кәметеү өсөн ҡараңғыла көн күрергә лә, кермер сайҡаған йә үҙе йыуынған һыуҙы түкмәй, уны икенсел маҡсаттарҙа файҙаланырға ла күптән өйрәнгән, меҫкенең. Заманында дан ҡаҙаныпп, ил мәнфәғәтенә көс түккән хеҙмәт ҡаһармандары хәҙер ана шундай фәҡирлектә ғүмер һөрөргә мәжбүр... Шунан, нисек уйлайһығыҙ, һаҡсыллыҡта маҡтарғамы әбекәйҙе, әллә йәлләп иларғамы?.. Һаҡсыллыҡтың йыш ҡына хәйерселек билдәһе булыуы ла бар бит ана шулай.

***Айтуған ИҘРИСОВ, программалаусы инженер:*** Бөтөн донъя экономиялау көнөн булдырыу идеяһы, мәғлүм булыуынса, һаҡлыҡ банкылары вәкилдәре йыйылышында барлыҡҡа килә. Шуға күрә был юҫыҡта фекер йөрөткәндә иң тәүҙә финанс өлкәһен күҙҙә тотоу кәрәктер, юғиһә, һаҡсыллыҡ, экономиялау мәсьәләһенең башҡа төрлө аспекттары ла бик күп. Улары хаҡында аҙағыраҡ әйтеп кителер, ә бына әлеге йыйылышта банкирҙар халыҡҡа аҡсаларын экономиялап, һаҡлыҡҡа һалып барырға өндәй. Мин, мәҫәлән, үҙемә зыянға аҡса экономиялау яҡлы түгелмен. Һин экономиялау яғын ҡарарға түгел, ә нисек итеп күберәк аҡса табыу юлын эҙләргә тейешһең. Ҡайһы кеше арзан тауар эҙләп тә экономияларға тырыша. Аҙаҡтан бының өҫләтә ҡиммәткә төшөүе хаҡында уйламай ҙа ул. "Арзанды алырға мин бит бай түгел" тигән әйтемде онотторға ярамайҙыр беҙгә. Теләгән нәмәңде һатып алырға аҡса йәлләп, үҙеңә зыянға экономиялау килер төшөмгә юлды ябыуға, йә булмаһа, ризығыңды сикләүгә килтереүе лә ихтимал. Тағы шундай тәбиғәт ҡануны ла бар: ни тиклем күберәк тотонаһың, шул тиклем килеп торасаҡ. Шуға ла болоң бар икән, уны эшкә ҡушыу йүнен күрергә кәрәк. Сөнки һинең ҡулдағы аҡсаның энергияһы бар, ул ниндәйҙер көскә эйә. Шул энергияны бушҡа таратыу ҙа дөрөҫ түгел, әлбиттә. Бер юлы ун туңдырма һатып алып, берәүһен генә ашап, ҡалғанын сүплеккә ырғытыу һымаҡ булмаһын. Булған болдо бушҡа тәләфләһәң, эргәңдән бәрәкәт китә, тиҙәр. Шунлыҡтан һыу, яғыулыҡ, электр энергияһы, тәбиғи байлыҡтар һәм башҡа ресурстарҙы үҙеңә етерлек кенә, самалап ҡулланырға кәрәк. Был йәһәттән мин - ҡуш ҡуллап һаҡсыллыҡ өсөн!


**(Дауамы 2-се биттә).**


## ШАҒИР ҺҮҘЕ



# ОРАН

*Хыял булып тыуҙым. Заман үткәс,*
*Әйләнермен бары хәтергә.*
*Тик өлгөрһәм ине шул арала*
*"Айны!" - тигән бер һүҙ әйтергә.*
*Айны, кеше, ҙәмһеҙ йоҡоңдан!*
*Көн яҡтырып һин күҙ асыуҙан.*
*Һәм өнөңдә һаташыуҙан айны,*
*Аҙашыуҙан айны - шашыуҙан.*
*Мин үтермен. Исемем телдән төшөр.*
*Бәлки, ҡалыр ошо ораным.*
*Үҙ-үҙемдән һораманым: "Һин кем?"*
*"Һин ни өсөнһөң?" - тип һораным.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ошо көндәрҙә Бөтөн донъя экономиялау көнө билдәләнә. Ошоға бәйләп, һаҡсыллыҡ яҡшы сифатмы, тигән һорау бирге килә...

(Башы 1-се биттә).

*Рәмилә ИҪӘНГИЛДИНА, эшҡыуар:* Һаҡсыллыҡ режимында эшләгәндә генә аҡса табып була, тигәндәренә былтыр Германияла командировкала булғанда күреп, инандым. Немец халҡының һаҡсыллығы һәм бөтә нәмәлә экономияларға ятарыуын бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ, ләкин улар өлгөһөнә эйәрергә бер ҙә ашыҡмайбыҙ, киреһенсә, уларҙың был сифатын йыш ҡына көлкөгә әйләндерәбеҙ. Ә шулай ҙа күңел төпкөлөндә уларҙың йәшәй һәм иҫәпләй белеүҙәренән, үҙ сығымдарын "микро"-аныҡлыҡта контролләй алыу һәләттәренән көнләшеү тойғоһо һымаҡ нәмә "кыбырлап" алғандай була. Башҡорт булараҡ, мин, әлбиттә, немецтарҙың ҡунаҡ яратмауҙарын, килеп ингән кешене, беҙҙәге кеүек, нимән бар, шуны ултыртып, ҡәҙер-хөрмәт итеү ғәҙәтенең булмауын бөтөнләй хуплай алмайым. Унда бит хатта дуҫ-ишен өйөнә лә түгел, ә кафе йә ресторанға саҡырып һөйләшеү ғәҙәткә ингән. Тик шуныһы көлкө: табын өсөн һәр кем үҙ кеҫәһенән түләй. Быныһын бөтөнләй аңлауы ҡыйын: һаҡсыллыҡмы, ҡарунлыҡмы был? Башҡа өлкәләргә килгәндә лә улар шулай уҡ бик иҫәпсел халыҡ. Һыуҙы бик экономиялайҙар, хатта ямғыр һыуын йыйып тотоналар. Хужабикәләр һауыт-һабаны беҙҙәге кеүек кран аҫтында шабырлатып түгел, ә табаҡҡа аҙ генә һыу алып йыуа, ҡайһы саҡ сайҡатып та тормай. Ваҡытлыса файҙаланмаған электр приборҙары, телевизор, компьютерҙарын электр селтәренән бөтөнләй һурып уҡ ҡуялар. Иҫке әйберҙәрен ташларға ашыҡмайҙар, ҡәҙерләп, йүнәтеп кенә тотоналар. Минең таныштарҙың машинаһы иҫке генә булыуына аптырағайным да, уның яңы ғына заводтан сыҡҡан кеүек эшләүен күреп, тағы бер ғәжәпләндем. Ошо машинала улар ике сәғәтлек юл үтеп, ташламалы "эконом-класс" үҙҙәренә йөрөй һәм алдан тәҙәлгән исемлек буйынса арзан хаҡҡа бер аҙнаға етерлек аҙыҡ-түлек һатып ала. Әйткәндәй, немец дуҫтарымдың финанс консультанты ла бар хатта. Уның кәңәштәре буйынса ҡайһы өлкәлә күпме экономияларға өйрәнеп, йәйге ялда йөрөп ҡайтырлыҡ аҡса туплай был ғаилә. Ике балалары үҫә, уларына тиклем бер-береһе менән ярышып суска-копилкаларына аҡса йыя. Күрәһең, һаҡсыллыҡ һәм иҫәпселлек ҡандан килә лер, тигән уйға ҡалам...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, яраһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ХАЛҠЫБЫҘҘЫҢ...
## ситтә йәшәгәндәре берҙәмерәк һымаҡ

**Рәүәт ҠОЛМӘМБӘТОВ, Ханты-Манси автономиялы округында Башҡортостан вәкиле, Ханты-Манси башҡорттары Ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:** Башҡортостандан ситтә йәшәүсе милләттәштәрҙе рухлыраҡ, берҙәмерәк итеп тоям. Улар республикала барған яңылыҡтарҙы күҙәтеп, бындағы үҙгәрештәр өсөн борсолоп, уйланып йөрөйҙәр. Беҙ шулай иҫәпләйбеҙ: ситтә йәшәгән милләттәштәр ҙә Башҡортостандың социаль-иҡтисади хәленә йоғонто яһарға тейеш. Себер нефть, газға бай территория. Ундағы предприятиеларға кәрәкле импорт тауарҙарын Башҡортостандың сәнәғәт предприятиеларында етештерелгән тауарҙар менән алмаштырыу, тендерҙарҙа ҡатнашып, үҙебеҙҙең тауарҙарҙы алға сығарыу кеүек эштәр алып барабыҙ. Сургут ҡалаһында үткәрелгән тендерҙа Башҡортостандан 20 предприятие ҡатнашты, һөҙөмтәлә 20 килешеү төҙөлдө. Улар араһынан Ишембай районының "Витязь" заводы, мәҫәлән, "Тюменьэнерго"ның тендерын еңде, хәҙер улар Канада болотоходтары урынына Ишембайҙа етештерелгән техниканы һатып ала. Минең "Башҡортостан" сауҙа йортом һәм "Башстройпроект" төҙөлөш компанияһ аша ла республикала етештерелгән тауарҙарҙы Себер яҡтарында сығарып һатыуҙы яйға һалырға тырышабыҙ. Тик тышҡы иҡтисади бәйләнештәрҙе нығытыу, республиканың позицияһын күтәреү буйынса беҙҙең тарафтан индерелгән тәҡдимдәрҙе бөтә етәкселәр ҙә тыңлап, ишетеп бармай шул...

Иҡтисад өлкәһендәге эштәрҙән тыш, Себер тарафтарында эшләүсе, йәшәүсе башҡорт йәштәрен туплау бурысы ла бар. Сөнки беҙҙең быуын инде ҡартая, үҙебеҙҙең киләсәкте хәстәрләй башлау зарур. Ханты-Манси автономиялы округында 40 меңләп башҡорт йәшәй, унда хәҙер беҙҙең балалар ғына түгел, ейән-ейәнсәрҙәр буй еткерҙе. Улар туған телен, башҡорттоң тарихын, мәҙәниәтен онотмаһын өсөн бик күп көс һалырға кәрәк. Әлегә ошо йүнәлештә эш башланып тора. Ситтә йәшәгән башҡорт балаларын Башҡортостанға йышыраҡ алып килеп, улар өсөн бында төрлө саралар ойоштороп, тамырҙары менән таныштырып торһаҡ, яҡшы булыр ине, тигән фекерҙәбеҙ.

Ил патриоттары иң тәүҙә үҙ халҡының, үҙ милләтенең патриоттары улар. Йәштәрҙе ошондай рухта тәрбиәләү өсөн дәүләт кимәлендә ниндәйҙер бер дөйөм вектор, милли идеология булырға тейеш. Ханты-Манси автономиялы округы хөкүмәте был йәһәттән бик аҡыллы эш итә, унда төрлө милләттәрҙең йәмәғәт ойошмалары лидерҙары менән тығыҙ бәйләнеш булдырылған, ҡарарҙар ҡабул иткәндә лә бер милләттең дә мәнфәғәтен сикләмәҫкә тырышалар. Губернатор эргәһендә милли мәсьәләләрҙе кәйләүсе совет эшләй, уның ултырыштарын губернатор һәр ваҡыт үҙе алып бара. Бынан тыш, Кавказ халҡы һорауы буйынса "Аҡһаҡалдар ҡоро" ойошторолдо, унда башҡорттар ҙа бар. Утыҙ йыл эсендә округҡа төрлө яҡтан йыйылған кешеләр араһында ниндәй генә милләт вәкиле юҡ, уларҙың һәр береһе үҙенең мәҙәниәтен һаҡларға тырышып йөрөй.

Ханты-Манси автономиялы округындағы аҫаба халыҡҡа булған мөнәсәбәт өлгөһө һоҡландыра. Бында аҫабалар урындағы хөкүмәт тарафынан айырыуса яҡлаулы. Улар өсөн төрлө дәүләт программалары ҡабул ителгән. Мәҫәлән, юғары уҡыу йортона инеүсе ханты һәм манси кешеләре бөтәһе лә бушлай уҡый. Беҙгә иһә балаларыбыҙҙы түләүһеҙ уҡытыу мөмкинлектәре сикләнгән. Автономиялы округ территорияһына ҡараған ерҙәр ханты һәм мансиларҙың нәҫелдән нәҫелгә күсеп килгән биләмәләре булғанға күрә, бер эш тә уларҙың ризалығынан тыш башҡарылмай. Мәҫәлән, нефтселәр килеп ҡаҙыу эштәре башлар алдынан иң тәүҙә хужаның рөхсәтен алырға, аҙаҡ, килешеү буйынса, ер өсөн аҡса түләүҙән алып, өй һалып, моторлы кәмә алып биреүгә тиклем бөтөн шарттарҙы үтәргә тейеш. Ханты һәм мансиҙар беҙҙең кеүек ауыл булып түгел, ә урман эсендә һәр бер ғаилә айырым бер чум ҡороп йәшәй. Һуңғы осорҙа был халыҡтарҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, туған телен хәстәрләп, нисә бала булыуға ҡарамаҫтан, һәр чумда мәктәп асыла башланы. Шуныһы һәйбәт: аҫабаларға ҡарата ошондай хәстәрлекте округта йәшәгән башҡа милләт вәкилдәре аңлап ҡабул итә...

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле бара. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнен тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**



● Шулай итеп, 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн октябрҙә **50665** индексы "Киске Өфө"гә **513 һум 72 тингә** яҙылырға мөмкин. Предприятиелар һәм ойошмалар өсөн билдәләнгән **50673** индексыһының хаҡы - **543 һум 72 тин**.

● Октябрҙә "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға еборгән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәкәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ - **С. Руденконың "Башкиры"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"История башкирского народа"**, 10 уҡыу-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов һәм "Рәсәй вертолеттары" холдингы генераль директоры Александр Михеев менән эшлекле осрашыу барышында республикала вертолет эшләүҙең торошон һәм уны үҫтереү перспективаларын тикшерҙеләр. Һүҙ холдингка ингән Күмертау авиация етештереү предприятиеһында "Ка" маркалы заманса вертолет техникаһын етештереү, 2014-2020 йылдарға етештереү тәьмин ителеше һәм ағымдағы контракт йөкләмәләренең үтәлеше, шулай уҡ предприятиены үҫтереү перспективалары тураһында барҙы.

✔Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың Ҡырғыҙстан Сауҙа-сәнәғәт палатаһы Президенты Марат Шаршекеев менән осрашыуы уҙҙы. Бөгөнгө көнгә республиканың тышҡы сауҙа тауар әйләнешендә Ҡырғыҙстандың өлөшө 14,7 процент (4-се урын) тәшкил итә. Башҡортостандың Ҡырғыҙстанға һатҡан төп тауарҙары иҫәбендә - нефть продукттары (дөйөм экспорт күләменән 94,5 процент), шулай уҡ химия, ағас эшкәртеү, металлургия һәм аҙыҡ-түлек сәнәғәте продукциялары. Республикаға электр лампалар, мамыҡ ептәр, йон һәм йәшелсә индерелә.

✔Башҡортостан Хөкүмәте бойороғо менән автомобиль юлдарында көслө ҡар һырынтылары, башҡа хәүефле һауа торошо күренештәре һәм тәбиғәт афәттәре эҙемтәләрен бөтөрөү буйынса юл-эксплуатация ойошмаларының эш тәртибе билдәләнә. Уның буйынса тәү сиратта федераль һәм төбәк әһәмиәтендәге юлдар, артабан муниципаль-ара юлдар, өсөнсө сиратта көрттән дөйөм файҙаланыуҙағы автобустарҙың даими хәрәкәте менән урындағы әһәмиәттәге юлдар таҙартыласаҡ.

✔Тотош Рәсәй буйынса, шул иҫәптән Башҡортостанда ла, 31 декабрҙән алып дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр күрһәтеүсе органдарға, ғариза биреүсенән йәшәү урыны буйынса теркәүҙе раҫлаған документ талап итеү тыйыла.БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - Хөкүмәт Аппараты Етәксеһе Илшат Тажетжинов билдәләүенсә, был документтар ведомствоара эш итеү тәртибендә һоратып алдырыласаҡ. Законға тәҙәтмәләр дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр алыу өсөн граждандарға кәрәкле документтарҙың теҙмәһен ярайһы уҡ кәметәсәк.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# БЕР КЕШЕГӘ "ҺИН" ТАМАН,

## Шуны белмәйбеҙ һаман...

**Һеҙгә үҙемде борсоған бер-нисә һорау менән мөрәжәғәт итәм. Иң тәүге һорауым - закондарҙың үтәлешенә бәйле. Ни өсөн беҙҙә ҡарарҙар, закондар үтәлмәй? Әллә уларҙы һүҙ юҡта - һүҙ, эш юҡта эш булһын, "Ата ҡаҙығыҙ кукәй һаламы?" тип һораған шикелле генә ҡабул итәләрме, уларҙы төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары исем өсөн генә сағылдырамы икән, тип тә уйлап ҡуям.**

Быйыл яҙ 10 июнгә тиклем балыҡ тотоуҙы тыйыу тураһында бойороҡ сыҡҡайны. Бойороҡ сыҡты ла ул, тик беҙҙең күлдәрҙә, йылғаларҙа балыҡ тотоу, уны аулау туҡталдымы икән? Юҡтыр, моғайын, сөнки законды һанға һуҡмаусыларҙың йылға-күл буйҙарында ҡармаҡ менән түгел, ә оҙон ауҙар менән йөрөп ятыуын күреп, ишетеп торабыҙ. Быныһы - бер мәсьәлә.

Икенсе борсоған тема былайыраҡ яңғырай: Аллаһы Тәғәлә яңғыҙ кешегә "һеҙ" тип өндәшеүҙе тыйған, тиҙәр. Мине беҙҙең йәмғиәттә киң таралыу алған "яһалма" ололоҡлау күренеше борсой. "Һеҙ" тип өндәшеп, бюрократты үҙебеҙ тыуҙырабыҙ һымаҡ тойола миңә. Түрәләргә генә түгел, ә берәй кабинетта ултырған йәш кенә хеҙмәткәргә лә "һеҙ" тип өндәшеп, уны ҡупырайтып, уға ла, үҙебеҙгә лә зыян эшләйбеҙ. Һөнәре, биләгән вазифаһы буйынса граждандарҙы ҡабул итергә, уларҙың төрлө мәсьәләләрен сисешергә тейеш булған белгестәрҙең аҙнаның айырым бер көнөндә генә ҡабул итеүе низән килеп сыға, тиһегеҙме? Миңә ҡалһа, әлеге лә баяғы, улар алдында түбәнселеккә төшөүебеҙҙән. Кресло артында ултыра икән, уға "һеҙ" тип, атаһының исемен ҡушып өндәшергә гәҙәтләнеүебеҙҙән шулай килеп сыға был. Башҡорттар түрәләргә бер ваҡытта ла атаһының исемен әйтеп һүҙ ҡушмаған. Олоға - ағай, кесегә - ҡусты, йә энем, тигән (мәҫәлән: бай ағай, мулла ағай, түрә ҡусты, һәм башҡалар). Беҙ доға ҡылғанда ла Аллаға "һин" тип ялбарабыҙ, ә бәләкәй генә бер вазифа биләгән әҙәмде "һеҙ" тип ололайбыҙ. Кешене Алланан өҫтөн ҡуйып, үҙебеҙгә гонаһ алабыҙ түгелме?

"Киске Өфө" гәзитенең 29-сы һанында "Һабантуйҙар... түрәләр өсөн генәме?" тигән мәҡәлә сыҡҡайны. Өсөнсө һорауым ошо турала. Ысынлап та, һабантуйҙар түрәләр иғтибарына ғына тап килтереп ҡоролған бер сәхнә әҫәре һымаҡ тойола. Район һабантуйҙарына йөрөүсе халыҡ минән минән килешер, моғайын. Унда һәр ауыл биләмәһе үҙ тирмәһен ҡороп ултырта. Әсендәге һый, ҙыйылмаған ҡағиҙә булараҡ, халыҡ өсөн түгел, ә райондың "юғары лига"һында урын биләгәндәр өсөн. Тирмә ҡорған ауыл биләмәһе кешеләре был табынға яҡын да бара алмай. Ҡыҫҡаса әйткәндә, был - районды "һайланма әҫәрҙәре" банкеты. Һиҙеп йөрөйөм - алдағы йәй ҙә шулай буласаҡ.

Быйыл Үрге Нуғай ауылынан Зөлфирә Әминева ауылдарында һөт эшкәртеү цехы асҡайны. Уны асыу тантанаһында миңә лә ҡатнашырға тура килде. Тантананан һуң халыҡҡа Әмәндек йылғаһы буйында бәләкәй генә һабантуй ойошторҙолар, ҡорбан ите ашаттылар. Тирмә лә бар ине, мин был юлы ла уны элита өсөн ҡорғандарҙыр, тип уйлап ҡуйҙым. Уйым дөрөҫкә сыҡманы: тирмә хужалары Гөлдәр Ишкыуатова һәм уның әсәһе был сарала халыҡтың затына, вазифаһына ҡарамай, барыһын да ихлас һыйланы. Район һабантуйҙарын үткәреүселәр бына кемдәрҙән үрнәк алһын ине, тип теләге килә.

Һәм тағы. Ауылдарҙа һәр ваҡыт теге йәки был абруйлы шәхес менән осрашыуҙар үтеп тора. Билдәләнгән көн килеп етеүе була, билдәһеҙлек башлана: "Касан килә?", "Әллә килмәйме?" һәм башҡалар. Саҡырылған ҡунаҡ килә ул килеүгә, тик бер-ике сәғәткә тотҡарланып, көттөрөп кенә килә. Минең фекеремсә, ул үҙе алдан килеп, халыҡты көтөргә тейеш, ә халыҡ уны түгел. Шул ваҡытта халыҡ уны ихтирам итер.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Һүҙемде түбәндәге шиғыр юлдары менән тамамлағым килә:**

*Һабантуйҙа аҡландарҙа*
*Ултыралар тирмәләр.*
*Эс яғына инә алмай,*
*Кешеләр тилмерәләр -*
*Үҙҙәре менән килтергән*
*Икмәкте кимерәләр.*
*"һайланма әҫәр"ҙәр эстә*
*Ашайҙар, типтерәләр...*

**Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ.**
**Баймаҡ районы II Этҡол ауылы.**

---

сыбыҙ башҡортса **"Дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныр.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға - **252 һум**.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **252 һум**.

**Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (540 һум 78 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

---

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҠАҒИҘӘЛӘР...

## ирек көсәй

**"Киске Өфө" гәзитенең 40-сы һанында Хәлиҙә Алтынбаеваның "Ҡағиҙәләрҙе... һәр кем үҙгәртә алмай" тигән мәҡәләһе баҫылғайны. Шундағы фекерҙәрҙе бер аҙ дауам итмәксе булдым.**

Әлбиттә, автор менән килешмәй булмай. Башҡорт телендәге яҙыу-һөйләү ҡағиҙәләренә үҙгәрештәрҙе ғалимдар даими ҡарарға, раҫларға йә инҡар итергә тейеш. Бәлки, терминологик һәм ғилми хеҙмәттәр янында "Йәмәғәтселек кәңәшмәһе" төҙөргә кәрәктер, тигән фекер тыуа. Ысынлап та, "Йәмәғәтселек кәңәшмәһе"ндә ғалим-ғалимәләр ҡарашы ғына түгел, ә телебеҙ яҙмышына битараф булмаған һәр кешенең фекере ишетелер, иҫәпкә алыныр ине. Бындай кәңәшмә эшмәкәрлеген ойоштороп ебәреү өсөн заман технологияларын, йәғни интернетты иркен ҡулланып була. Теләк һәм юл башлаусыһы ғына кәрәк.

Авторҙың һүҙлектәр тураһындағы тәҡдиме менән дә килешәм. Был юҫыҡта ла йәмәғәтселектең әүҙем ҡатнашыу мөмкинлеге бар. Әйтәйек, халыҡ-ара кимәлдә алып барылған "Викиһүҙлек" мәғлүмәт блогына һәр кеше ярҙам итә ала. Бер ыңғайҙан, башҡорт телендәге бүлек төҙөшөргә телһөйәр ирекмәндәрҙе саҡырам.

Мәҡәләлә килтерелгән миҫалдарға (митинг, рейтинг, шопинг һ.б.) ҡарата минең фекерем икенсе төрлөрәк. Сит телдән ингән һүҙҙәргә нисек дөрөҫ ялғау ҡушырға тип баш ватҡансы, алмашына башҡортса һүҙ эҙләп табыу отошлораҡ булыр ине. Башҡортса алмашы була тороп, ҡулләп сит милләт һүҙен ҡулланыу телебеҙҙе байытмай, ә уны ярлыландыра ғына. Әйткәндәй, сит телдән ингән һүҙҙәргә алмаш табыу менән туғандаш төрки халыҡтары: ҡаҙаҡтар һәм төрөктәр әүҙем шөғөлләнә. Википедия эшмәкәрлегендә һәр ваҡыт уларҙың тел байлығына иғтибар итәм. Бәҡһаң, төрөктәр Ататөрк заманында уҡ бик күп ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәренән арынған икән.

Әлбиттә, мин киҫкен үҙгәрештәр яҡлы түгелмен, әммә үткән быуатта урыҫ милләтле төркиәтсе ғалим тәү башлап яҙып биргән ҡағиҙәләргә "маңлай оролғансы һуғылырға" ла теләмәйем. Миҫал да килтереп китеү урынлы булыр. Күп кенә тел ғалимдарына һорау биреп тә, аныҡ ҡына яуап ала алманым. Бәлки, йәмғиәт яуап бирер? Ни өсөн туғандаш ҡаҙаҡ менән башҡорт телендә ҡағиҙәләр айырыла? Ниңә ҡаҙаҡтар үҙ илен "Ҡаҙаҡстан" тип атай, ә башҡорттар "Ҡаҙағстан" тип ҡулана? Айырма бишенсе хәрефтә. Минең уйымса, бында урыҫ теленең баҫымы ярылып ята. Урыҫса бит "Казакстан" тип яҙып булмай, казактар бөтөнләй башҡа халыҡ, шуға күрә "Казахстан" итеп яҙыла һәм артабан башҡорт теленә яраҡлаштырыусы ҡағиҙә ҡулланыла. Тик, ниңә ул ҡағиҙә ҡаҙаҡтарҙа юҡ һуң?

Тағы бер һорау. Ниңә "Башҡортостан" һүҙендә милләт менән ил төшөнсәһен тоташтырыусы һигеҙенсе "о" хәрефе бар, ә башҡа Рәсәй республикалары һәм донъя дәүләттәренең "стан" һүҙе ҡушылған үҙатамаларында ундай хәреф юҡ? Шул уҡ ваҡытта, урыҫ телендәге атамаларҙа быға миҫалдар осратырға була. Бәлки, кемдер "Был кеше тома наҙан"тип әйтер. Тулыһынса килешәм. Бала саҡтан уҡ урыҫ теленән дә ҡатнарлыраҡ башҡорт теле ҡағиҙәләрен ятлауҙы хуп күрмәнем һәм уларҙы белмәйем. Ә һеҙ, белемлеләр, мин ҡуйған һорауҙарға яуап бирә алаһығыҙмы?

**Рәстәм НУРЫЕВ,**
**Башҡорт Википедияһы ирекмәне.**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәстәм Хәмитов сәнғәт, физик культура һәм спорт өлкәһендә профессиональ программаларҙы тормошҡа ашырыусы дөйөм белем биреү һәм өҫтәмә белем биреү ойошмаларының һәләтле уҡыусыларына айлыҡ Башҡортостан Президенты стипендияларын тәғәйенләү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Президент исемлегенә төрлө ҡала һәм райондарҙан йөҙ кеше ингән.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Дмитрий Шаронов дәүләт наградаларына лайыҡ булған Башҡортостан ғалимдарына гранттар тапшырыу тантанаһы уҙғарҙы. Рәсәй Президенты грантына һигеҙ йәш ғалим һәм өс ғилми мәктәп лайыҡ булды. Фәндәр докторы өсөн грант 1 миллион һум, фәндәр кандидаты өсөн - 600 мең, мәктәп өсөн 400 мең тәшкил итә.

✓Рәсәй йәштәр делегацияһы Ҡытайға китте. Делегация составына илдең бөтә төбәктәренән 100 кеше ингән. Башҡортостан делегацияһында Ҡытайға БР Ҡоролтай ҡарамағындағы Йәштәр йәмәғәт палатаһы ағзаһы Елена Арямнова, Рәсәй Йәштәр союзының төбәк бүлексәһе рәйесе Диана Вәлиева һәм Өфө хакимиәтенең Йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты рәйесе Урал Килсенбаев бар.

✓Халыҡ-ара студент баскетбол лигаһы "EuroCup-2015"-кә милли һайлап алыу уйындары башланды. Башҡорт дәүләт аграр университеты командаһы миҙгелде еңеү менән асты - Магнитогорск менән күсмә матчта баскетболсыларыбыҙ "Металлург-университет"ын 82:56 иҫәбе менән еңде. Студент баскетбол командаларын һайлау уйындары Халыҡ-ара студент баскетбол лигаһында ҡатнашыусы башҡа илдәрҙә лә бара. Рәсәй ойоштороусы хоҡуғында бер команданы түгел, ә дүртәүҙе һайлап аласаҡ. Милли һайлап алыу уйындары буйынса иң яҡшылар 2015 йылдың февраль-майында Европа беренселеге өсөн көс һынашасаҡ.

✓Өфөнөң 153-сө лицейы унынсы сыныф уҡыусыһы Иван Веселов (уҡытыусыһы - Александр Гильдин) информатика буйынса Азия һәм Океания олимпиадаһында алтын миҙал яуланы. Информатиканы бик яҡшы белеүселәр араһында бәйге быйыл һигеҙенсе тапҡыр уҙҙы, унда Австралия, Ҡытай, Корея, Гонконг, Тайвань, Малайзия, Вьетнам, Иран кеүек 29 илдән 600-ҙән ашыу уҡыусы ҡатнашты. Тәүге тапҡыр Рәсәй, Әрмәнстан, Грузия, Израиль, Тажикстан, Төркмәнстан ҡатнашты.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Мостай Кәрим һаман да ике ярҙы, ике донъяны тоташтырып тороуын дауам итә. Ул балалар менән ололар, ябай эшсәндәр менән хакимдар, үткән менән киләсәк, бөгөнгө менән мәңгелектең араһындағы күпер.*



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ҠУЛЫ ОҪТА...

## аҡсаһыҙ ултырмаҫ



**Мин - машина ене "ҡағылған" ир-егеттәрҙең береһе. Бәләкәй саҡтан атайыма машина, трактор, мотоцикл йүнәтергә ярҙамлаштым. Шуға күрә был өлкәне һәйбәт беләм. Оҫталығымды килем килтереүсе шөғөл булараҡ ҡулланам - күсмә автосервис булдырҙым.**

Һәр машина даими иғтибар талап итә. Ләкин күпселек автомобиль хужалары "тимер ат"тарына көн һайын тейешле ваҡыт бүлә алмай. Шуға күрә минең хеҙмәт ҙур һорау менән файҙалана. Был эшмәкәрлек ярҙамында ҡатмарлы ремонт эшләп булмай һәм был маҡсатҡа ынтылырға ла кәрәкмәй. "Тәгәрмәс өҫтөндәге оҫта"-ның төп бурысы - машинаның тәҙәклөгән контролдә тотоу, майын һәм башҡа шыйыҡсаларын, ҡалыб (колодка), тәҙрә таҙартыу ҡулайламаһын һәм башҡа ваҡ, әммә мөһим деталдәрен алмаштырыу, аккумулятор, шиналарҙың торошон ҡарау, салонды таҙартыуға ҡатып ҡала. Быларҙы башҡарыу өсөн ҡыйбатлы ҡорамалдар кәрәкмәй. Тейешле урынға тиҙ барып етеү өсөн машина, шулай уҡ компрессор, саң һурҙырғыс, бер-ике домкрат, төрлө үлсәмдәге асҡыстар, автомобиль аҫтын ҡарау өсөн тәгәрмәсле ятыу ҡорамалы кәрәк буласаҡ. Шулай уҡ май, шәм һәм башҡа материалдар һатып та өҫтәмә аҡса алырға була.

Клиенттарҙы йәлеп итеү өсөн бағанаға иғландар йәбештереп сығыу ярҙам итмәйәсәк. Быңдай хеҙмәт менән, гәҙиттә, хәлле кешеләр ҡуллана, ә улар бағаналағы иғландарҙы уҡып йөрөмәй. Шуға күрә рекламаны уйлап башҡарыу мөһим. Ҡыйбатҡа төшһә лә гәзиттә иғлан баҫтырырға, радио һәм телевидение экраны аша әйттерергә мөмкин. Шулай уҡ сифатлы ҡағыҙға, иғтибарҙы йәлеп итерлек итеп эшләнгән визитка эшләтеү һәм уны таратыу ҙа файҙалы буласаҡ. Түләүле машиналар ҡуйыу урындарында автомобиль тәҙрәләренә бәләкәй иғландар ҡыҫтырып сығыу ҙа артыҡ булмаҫ. Клиенттарҙы бер йәки яҡын урынлашҡан бернисә офистан табырға тырышырға кәрәк. Бындай осраҡта ҡала буйлап бер урындан икенсе ергә сабып йөрөмәҫкә, ә тыныс ҡына үҙ эшенде башҡарырға мөмкин.

Автомобилдәрҙе ҡарауҙы, гәҙәттә, эш сәғәттәре ваҡытында башҡарам. Былай эшләү миңә лә, машина хужаларына ла ҡулай. Минә ҡайҙалыр ҡала ситенә барып йөрөйһө түгел. Ә автоһәүәҫкәрҙәрҙә иһә эштән сығыуға ҡаралған һәм тәҙәк машина ҡаршы ала.

Ҡулы оҫта - аҡсаһыҙ ултырмаҫ, ти атайым. Ысынлап та, белгәнеңде урынлы файҙаланыу һәм килем алыу бер кемгә лә зарар итмәй. Техника менән дуҫ булғандарҙы минең эшмәкәрлек ҡыҙыҡһындырыр, тип уйлайым.

**Фәнүр АБДУЛЛИН,**
**Өфө ҡалаһы.**

АФАРИН!

**Һуңғы йылдарҙа йәш быуындың рухи тәрбиәһе, әхлағы, тәртибе тураһында бик борсолоп һөйләйбеҙ. Балаларыбыҙҙы илһөйәр, рухлы итеп үҫтереү өсөн нимә эшләргә, уларҙы эскерһеҙлек, кешелеклек сифаттары юғала барған йәмғиәттән нисек һаҡларға, туған теленә һөйөү уятыр өсөн ниндәй саралар күрергә, тигән һорауҙар менән янабыҙ. Ә бына М.Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында ошо ҡатмарлы һорауҙарға яуап күптән табылған төҫлө. Белем усағында Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең ижадына арналған әҙәби-музыкаль саралар, "Мостай уҡыуҙары" әҙәби-ижади конкурстар даими уҙғарылып тора һәм улар тап ана шул илһөйәрлек, рух тәрбиәләүгә булышлыҡ итә лә инде.**

# МОСТАЙ КӘРИМ ҺҮҘЕ...

## ике ярҙы, ике донъяны тоташтырып тора һаман




Инде етенсе тапҡыр үткәрелеүенә ҡарамаҫтан, был ижад кисәләрендә һәр ваҡыт гимназияның тамаша залы шығырым тулы була: балалар, уҡытыусылар, ата-әсәләр теләп килә. Оло быуын кешеләре шағир тураһында хәтирәләргә сорналып ултырһа, республиканың төрлө райондарынан йыйылған мәктәп уҡыусылары бөйөк һүҙ оҫтаһы менән яҡындан таныша. Инде күпме йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан, Мостай Кәрим һаман да ике ярҙы, ике донъяны тоташтырып тороуын дауам итә. Ул балалар менән ололар, ябай эшсәндәр менән хакимдар, үткән менән киләсәк, бөгөнгө менән мәңгелектең араһындағы күпер. Әҙәби кисә барышында уның һүҙҙәренә яҙылған йырҙарҙы, шиғырҙарҙы тыңлап, сәхнә әҫәрҙәренән өҙөктәр ҡарап, һәр кем халҡыбыҙ өсөн Мостайҙың ниндәй бөйөк шәхес булғанын күңеле менән тойоп ултырҙы. Мостай Кәримдең тыуыуына 95 йыл тулыуға арнап ойошторолған был кисә алдағыларына ҡарағанда бигерәк тә күтәренке рухлы булыуы менән айырылып торҙо. Мәктәп уҡыусыларының Мостай Кәримдең ижадын өйрәнеп кенә ҡалмай, үҙҙәре лә ҡәләм тирбәтеүенә шаһит булындың.

"Мостай уҡыуҙары" әҙәби-ижади конкурсының һөҙөмтәләре буйынса йомғаҡтар ҙа ошо сара сиктәрендә билдәләнде. "Бөтәһе мең ярымдан ашыу ҡатнашыусы араһынан еңеүселәрҙе һайлап алыуы еңел булмаһа ла, гәҙел баһа бирергә тырыштыҡ, - ти конкурсты ойоштороусыларҙың береһе Ләйсән Мәмбәтҡолова. - Уҡыусылар ғына түгел, уҡытыусыларҙың да теләп ҡатнашыуы, дәрестәр күрһәтеүе ҡыуандырҙы. Әйткәндәй, "М. Кәрим әҫәрҙәре буйынса дәрес әҙерләү" номинацияһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ғына түгел, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ла ҡатнашты. Шуға күрә улар араһында икешәр еңеүсе билдәләнде: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары араһында Люция Ноғоманова (Борай районы, Оло Батраҡ ауылы) беренсе урынға сыҡһа, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары араһында Лилиә Сәлихованың (Өфө районы, Шамонин ауылы) эше юғары баһаланды".

Баймаҡ ҡалаһының 3-сө мәктәбе уҡытыусыһы Фәнүрә Сирғәлина сара тураһында: "Тәү сиратта шуны әйтеп үтәйем, уҡыусым Гүзәл Сирғәлина ижади эштәр конкурсында беренсе урын яуланы. Бындай саралар балаларҙа әҙиптең ижадына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятһа, беҙҙең өсөн бында килеү хәтирәләрҙе иҫкә алыу менән әһәмиәтле. Үҙем Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡып йөрөгәнемдә "Шишмәләр" әҙәби түңәрәген етәкләнем һәм Мостай Кәримде 60 йәшлек юбилейы айҡанлы бер төркөм иптәштәрем менән өйөнә барып кисәгә саҡырғайныҡ. Ул бәләкәс кенә балаларҙы итәғәтле итеп сәй эсереп, ике сәғәт беҙгә әҫәрҙәре тураһында һөйләп, төрлө һорауҙарыбыҙға яуап биреп, китаптар бүләк итеп, ҙур кешеләр кеүек ҡабул итеп, шатландырып ҡайтарып ебәрҙе. Ул тере сағында ғына түгел, хәҙер ҙә балаларға ҡанат үҫтереүенә шаһит булдым бөгөн", - тип, фекерҙәре менән бүлеште.

**Кешелек тарихы биттәрен аҡтарғанда, ниндәй генә милләттәр осрамай унда. Берәүҙәр тураһында вайымһыҙ ғына телгә алына, ә ҡайһы бер халыҡтарҙың бөйөклөгө, көсө ҡуктәргә ашырып бәйән ителә. Тик һәр ваҡыт нимәгә иғтибар итергә мөмкин: халыҡтың алға китешен, тотош милләттең данын айырым шәхестәр билдәләй. Бигерәк тә үҙ-үҙенән "Һин кем?" тип түгел, "Һин ни өсөн?" тип һорап йәшәүселәр, халҡына "Айны!" тигән бер һүҙ әйтергә өлгөргәндәр заман үтеү менән бары хәтергә генә ҡалһа ла, бер ҡасан да иселе телдән төшмәйәсәк.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓"Вести-Башҡортостан"дың мәғлүмәти программаһы "ТЭФИ-төбәк"-2014 финалсыһы булды. Төбәк этабының финалы Пятигорск ҡалаһында уҙҙы. 2014 йылда "ТЭФИ-төбәк" премияһына 490 эш дәғүә итте. Конкурс 19 номинация буйынса уҙғарылды. Конкурстың йомғаҡлау этабы 2014 йылдың 25-28 ноябрендә Сочиҙа үтәсәк.

✓30 октябргә тиклем Башҡорт дәүләт университеты 9-11 синыф уҡыусылары өсөн Фән көндәре уҙғара. Өлкән синыф уҡыусылары университеттың алдынғы уҡытыусыларының иң көнүҙәк проблемалар тураһындағы улар өсөн махсус әҙерләнгән лекцияларын тыңлай аласаҡ. 28 октябрҙә БДУ-ла бер юлы биш, 29 октябрҙә ике лекция уҙасаҡ. 30 октябрҙә өлкән синыф уҡыусыларын Идара итеү һәм эшҡыуарлыҡ хәүефһеҙлеге институтында һәм математика һәм мәғлүмәти технологиялар факультетында көтәләр.

✓Бөтә Рәсәйҙәге кеүек, Башҡортостанда ла 26 октябрҙән алып даими "йәйге" ваҡыт бөтөрөлә. Яңы ваҡыт иҫәпләү тәртибе урындағы ваҡыт буйынса 2 сәғәттә, Удмурт Республикаһы, Һамар һәм Кемерово өлкәләре, Камчатка крайы һәм Чукотка автономиялы округынан тыш, илдең бөтә территорияһында сәғәт уктары бер сәғәткә артҡа күсерелгәс эшләй башлай. Байкал аръяғы крайында һәм Магадан өлкәһендә сәғәт уктары ике сәғәткә артҡа күсерелә. Шулай уҡ илдәге элекке туғыҙ сәғәт зонаһы урынына 11-ҙе ойоштороу күҙаллана. Башҡортостан дүртенсе сәғәт зонаһына (Мәскәү+2, UTC+5) ҡарай.

✓Фәйзи Гәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле "Һалдат бейеүе" постановкаһы өҫтөндә эшләй. Ул 2015 йылда билдәләнәсәк Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына арналған. Бейеүҙең хореографы - Көньяҡ Осетия Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, доцент, Һамар дәүләт мәҙәниәт һәм сәнғәт академияһының халыҡ бейеүҙәре кафедраһы мөдире, "Волга биҙәктәре" ансамбленең художество етәксеһе Алексей Шишкин. Бейеүҙә тулыһынса коллектив йәлеп ителәсәк. Әлеге ваҡытта костюмдарҙың эскиздары өҫтөндә эш алып барыла, ә яңы композицияның репетициялары ғинуарҙа башланасаҡ.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ

# КОММУНИЗМДАН - КАПИТАЛИЗМҒА...



**Быйыл яҙғыһын Хөкүмәт торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәрҙе арттырыу схемаһын раҫланы. Хәҙер уларҙың күләме коммуналь түләүҙәрҙең сикке индексы үҫешенә бәйле буласаҡ. Был күрһәткестәр һәр төбәк өсөн айырым иҫәпләнәсәк.**

Былтыр декабрҙә "Рәсәй Федерацияһының Торлаҡ кодексына һәм Рәсәй Федерацияһының айырым закон акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында" 417-ФЗ законы ҡабул ителде. Тап ошо документ коммуналь түләүҙәрҙең яңы схемаһын раҫлай ҙа инде. Бынан ары Рәсәйҙә ТКХ хеҙмәттәре өсөн түләүҙәрҙең үҫеүҙең сикке индексы индерелә һәм ул тариф сеткаһындағы үҙгәрештәрҙе сикләйәсәк. Ул чиновниктарға фатир өсөн түләүҙәрҙе нигеҙһеҙ күтәреүгә һәм ТКХ-ның туҙған системаһын тотоу сығымдарын граждандар елкәһенә бер ниндәй контролһеҙ һалып ҡуйырға юл ҡуймаясаҡ.

Рәсәй Федерацияһының һәр субъектында тарифтарҙың индивидуаль үҫеүе ҡарала. Фатир өсөн түләүҙәрҙең йыл һайын үҫеүе ике өлөштән тора: Хөкүмәт иҫәпләгән сикке индекстың үҫеүенән һәм төбәк өҫтәмәһенән. Урындағы властар был индексты 1,5 тапҡырға арттырырға хоҡуҡлы. Йәғни Мәскәүҙә төбәк өсөн тарифтарҙың артыуы 10 процент тип раҫланһа, төбәк етәксеһе уны 15 процентҡаса күтәрә ала. Индексты билдәләгәндә илдең социаль-иҡтисади үҫеше, инфляция кимәле һәм һәр төбәктең иҡтисади үҫешенең индивидуаль коэффициенты иҫәпкә алына.

Был үҙгәрештәр йылдың икенсе яртыһынан ғәмәлгә инде. Шулай итеп, тарифтарҙың етди артыуын Яҡутстан һәм Камчатка крайының күсемһеҙ милек хужалары көтә - был төбәктәр өсөн 6,7 процент индексы ҡуйылған. Бынан тыш, сағыштырмаса юғары индекстар - 6,1 һәм 6 процент - Пенза һәм Төмән өлкәләрендә, Башҡортостанда һәм Приморье крайында. Төньяҡ Осетияла квартплата үҫеше - иң "яйы". Бында урындағы сикке индекс 3,2 процент тәшкил итә.

Сикке индекстан тыш, квитанцияларҙа тағы бер өҫтәмә юл барлыҡҡа килде - капиталь ремонт - һәм ул сығымдарға һиҙелерлек йоғонто яһаясаҡ. Дәүләт Думаһы күп фатирлы йорттарҙы капиталь ремонтлауҙы финанслау системаһын булдырыу тураһында закон ҡабул итте һәм ул барлыҡ милекселәргә лә ай һайын аҡса күсереүҙе йөкмәтә. Уларҙың күләмен һәр субъекттың урындағы властары үҙҙәре хәл итә. Әлегә барлыҡ төбәктәр ҙә капиталь ремонтҡа иғәнә күләмен асыҡламаған.

Күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр дөйөм аҡсаның ҡайҙа һаҡланасағын үҙҙәре хәл итә һәм контроллəй ала. Бының өсөн улар дөйөм йыйылыш үткәреп, ҡарар сығарырға тейеш. Ә аҡсаларҙы туплауҙың һәм ҡулланыуҙың ике варианты бар: махсус иҫәп асып, шунда тупларға һәм капиталь ремонтҡа тупланған аҡсалар менән үҙҙәре үк идара итергә йәки төбәк операторына ебәрергә. Төбәк операторы - ул "дөйөм ҡаҙан", унда бер нисә йорттан килгән аҡса туплана.

Беренсе осраҡта милекселәр үҙҙәре подрядсыны һайлау һәм иҫәптә тейешле сумма туплаunion менән бинаны төҙөкләндереүгә тотона ала. Аҡсаларын төбәк операторына күсереүселәр чиновниктарға ышанырға тейеш була. Бынан тыш, уларҙың йортона капиталь ремонт башҡа күп ҡатлы йорттарға яһалған кеүек, сират буйынса башҡарыласаҡ. Милекселәргә үҙҙәренең төбәгендә ҡасан капиталь ремонт программаһы раҫланыуын күҙәтеп барырға кәрәк. Урындағы властар түләү күләмен билдәләгәс, милекселәргә ике ай дауамында аҡса тупланыу схемаһын һайлауға ваҡыт бирелә. Әгәр ошо ваҡыт эсендә кешеләр нисек эш итеү юлын асыҡлап өлгөрмәй икән, уларҙың йорто автоматик рәүештә төбәк операторына беркетелә.

"Башҡортостан Республикаһының төбәк операторы" фонды быйылғы планға индерелгән йорттарҙы ремонтлай башлаған да инде. Әлегә ремонт эштәре федераль, республика һәм муниципаль берәмектәрҙең бюджеттары иҫәбенә башҡарыла. Октябрҙән башлап иһә милекселәр капиталь ремонт өсөн ай һайын иғәнә индерә башлаясаҡ. Күп фатирлы йорттарҙы капиталь ремонтлау программаһы 30 йылға иҫәпләнгән.

2015 йылдың 1 июленә инде Башҡортостанда торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә тарифтарҙың үҫеүе 14,3 процент кимәлендә билдәләнеүе көтөлә. Йәғни йылылыҡ өсөн 9,6 процентҡа, һыуға - 14,4 процентҡа, газға һәм электр энергияһына 7,5 процентҡа хаҡтар артыуы көтөлә.

Ә быйыл июлдә һәм сентябрҙә хаҡтарҙың ҡапыл артыуы ҡайһы бер тәьминәт ойошмаларының ("Өфө һыу каналы" МУП-ы, "БашРТС" яуаплылығы сикләнгән ширҡәте, "Өфө инженер селтәрҙәре" МУП-ы, шулай уҡ Стәрлетамаҡ, Сибай, Салауат ҡалаларының һыу каналдары ойошмалары) Тарифтар буйынса дәүләт комитетының 2014 йылға билдәләгән тарифтары менән килешмәйенсә, Тарифтар буйынса федераль хеҙмәткә (ФСТ) мөрәжәғәт итеүе менән аңлатыла. Халыҡҡа торлаҡ-коммуналь хеҙмәте өсөн түләүҙәр көсөргәнешен кәметеү маҡсатында яңы тарифтарҙы ҡулланыу бер аҙға кисектереп торола.

Тәьминәт ойошмалары етәкселеге был аҙымға барыуҙарын әлегәсә ғәмәлдә булған тарифтарҙың туҙған селтәрҙәргә капиталь ремонт яһау, уларҙың тейешле кимәлдә эшләүен тәьмин итә алмауы менән аңлата. Әгәр бөгөнгә 25 йылдан ашыу файҙаланылған селтәрҙәр күләме 40 проценттан ашыу булһа, йыл һайын был һан тағы ла ике процентҡа үҫә бара. Ә ремонт эштәре бер процент майҙанда алып барыла. Һәм әлегәсә ойошмалар планлы эшләүгә ҡарағанда, авария режимында эшләй. Бының сәбәбе булып хеҙмәттәр өсөн ваҡытында түләмәүҙәр, хеҙмәттәрҙе ҡулланыуҙағы урлашыуҙар, ҡайһы бер идара итеү компанияларының намыҫһыҙлығы тора.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер яҡтан, фатир өсөн түләүҙәрҙең артыуы, капиталь ремонт өсөн түләүҙәрҙең барлыҡҡа килеүе дөрөҫ тә түгел һымаҡ. Икенсе яҡтан ҡарағанда, шәхси йорттарҙа йәшәүселәр ҙә, күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр ҙә - шул уҡ милекселәр. Ләкин шәхси йорттарҙа йәшәүселәр өйҙәренә ремонт яһағанда, уларға бит федераль, республика, муниципаль бюджеттан бер тин дә аҡса бүленмәй. Улар бөтөн ремонтты үҙ иҫәптәренә башҡара. Ә өй тигән күсемһеҙ милеккә ғүмер буйына өйөргә лә өйөргә кәрәк. Шул күҙлектән сығып фекер йөрөткәндә, күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр ҙә үҙ өйҙәренә үҙҙәре "өйөргә" тейеш түгелме ни?**

**Әгәр закон сығарыусылар ошо ҡараштан сығып үҙгәрештәр индерһә, шәхси йорттарҙа йәшәүселәрҙең күсемһеҙ милеккә һалым түләгәненән сығып ҡарағанда, күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр ҙә тиҙҙән (2016 йылдан) фатир өсөн генә түгел, ер өсөн дә һалым түләүе ихтимал түгелме икән?.. Йәғни, ҡасандыр коммунизмда йәшәп ҡалғанбыҙ икән, хәҙер капитализм хөкөм һөрә - һәр кем үҙе өсөн йәшәй, һәр кем үҙ тормошон үҙе хәстәрләй.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## БАЛАНЫҢ БӘЛӘҺЕ

**Фатирыбыҙ минең, иремдең һәм ҡыҙыбыҙҙың шәхси милкендә. Ҡыҙыбыҙ фатирға сит өлкәнән килгән егетен йәшәргә алып килде. Беҙ быға ҡаршыбыҙ, ләкин уны нисек сығарырға белмәйбеҙ. Беҙгә әйтмәйенсә, ҡыҙыбыҙҙың уны теркәүгә ҡуя алыу-алмау мәсьәләһе лә борсой.**

- Фатирҙа кемделер теркәү өсөн шәхси милек хужаларының барыһының да рөхсәте талап ителә. Шуға күрә ҡыҙығыҙ, бик теләһә лә, һеҙҙең рөхсәттән тыш быны эшләй алмаясаҡ. Был РФ Граждандар кодексының 247-се статьяһында билдәләнгән.

Фатирҙа теркәүһеҙ йәшәү законға яраҡһыҙ. Шуға күрә, "ҡунағығыҙҙы" суд аша сығара алаһығыҙ. Әгәр ҙә ул суд ҡарарын инҡар итеп, фатирҙан сығыуҙан баш тартһа, эшкә суд приставтары тотонасаҡ.

## ИҪӘПЛӘГЕСТЕ ПЛОМБАЛАУ

**Эҫе һәм һыуыҡ һыуға иҫәпләгес ҡуйғайныҡ. Уларҙы пломбалау өсөн торлаҡ-эксплуатация участкаһы аҡса түләүҙе талап итә. Был законлымы?**

- Иҫәпләү приборҙарын пломбалау бушлай башҡарылырға тейеш. Аҡса түләү элекке пломбаның бөтөнлөгө боҙолоп, яңыны эшләткән осраҡта ғына түләнә. Был 2011 йылдың 7 декабрендә ҡабул ителгән "Һыу менән тәьмин итеү тураһында"ғы Федераль закондың 5-се пунктында (20-се статья) билдәләнгән. Шуға күрә һеҙ торлаҡ-эксплуатация участкаһы етәксеһе исеменә бушлай пломбалау үткәреүҙе талап итеп ғариза яҙа алаһығыҙ. Ғаризала өҫтә күрһәтелгән законға һылтанырға мөмкин. Әгәр ҙә был да хәлде үҙгәртмәһә, йәшәү урыны буйынса прокуратураға, шулай уҡ Роспотребнадзорға һәм Торлаҡ дәүләт инспекцияһына ялыу менән мөрәжәғәт итеү үҙ һөҙөмтәһен бирер.

Әйткәндәй, электр энергияһы һәм газ иҫәплəгестәрен пломбалау өсөн дә ошо уҡ ҡағиҙә ғәмәлдә.

## ҠУЛЛАНМАЙЫМ, ӘММӘ ТҮЛӘЙЕМ

**Мин 9 ҡатлы йорттың беренсе ҡатында йәшәйем, шуға күрә лифт менән ҡулланмайым, ләкин уның өсөн түләйем. Минең осраҡта лифт өсөн түләү нисек башҡарылырға тейеш? Уны бөтөнләй түләмәү мөмкинме?**

- РФ Торлаҡ кодексының 1-се бүлегендәге 36-сы статьяһына ярашлы, пассажир һәм йөк лифттары, лифт шахталары күп ҡатлы йорттоң дөйөм милке тип иҫәпләнә. Шулай уҡ закон лифттарҙың, баҫҡыс майҙансыҡтарының һәм башҡаларҙың теге йәки был подъездыҡы ғына түгел, ә тотош йорттоҡо итеп билдәләй. Шуға күрә, ниндәй ҡатта йәшәүенә ҡарамаҫтан, һәр кем дөйөм милек өсөн түләргә бурыслы. Түләү хаҡы һәр кемдең фатир биләмәһенән сығып билдәләнә.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Үҙәк көйөү

❖ Сей картуфтың һуты ашҡаҙандың әселеген нормаға килтерә. Уны көн һайын 3 тапҡыр ашар алдынан 50 мл эсергә. Бигерәк тә ҡыҙыл сортлы картуф файҙалы.

❖ Үҙәк көйгәндә 6-10 бөртөк борсаҡ сәйнәгеҙ.

### Инфекциялы яралар

❖ Пенициллин, стрептоцид, камфара майы, балды тигеҙ өлөштә алып, болғатып, яраға бер тәүлеккә бәйләп ҡуйырға.

❖ Кәбеҫтә менән йомортҡа ағын ҡушып болғатып, яраға һөртөргә.

### Тире ауырыуҙарынан

❖ Бойҙайҙы шыттырып, көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ашарға. Һөт, һыу, сәйгә ҡушып ашарға ла ярай.

### Ингаляция

❖ Тамаҡ, тын юлдары, үпкә ауырыуҙары - ҡурылдай, туберкулез, ангина, һалҡын тейеү, киҙеү, фарингит мәлендә ингаляция эшләгеҙ. 200-300 мл ҙурлыҡтағы кәстрүлгә 60 г прополис, 40 г балауыҙ һалығыҙ һәм ҡайнап ултырған һауытҡа ҡуйығыҙ. Быу күтәрелә башлағас та 10-15 минут дауамында уны һулағыҙ. Быны 10-15 көн буйына көнөнә ике тапҡыр - иртәле-кисле эшләргә кәрәк.

### Кесеткән биҙгәге (бүре ыуы)

❖ Был сабыртма организмдың ҡайһы бер ризыҡтарға, дарыуҙарға, бөжәктәрҙең тешләүенә һиҙгерлеге тураһында һөйләй. Әгәр ҙә кесерткән биҙгәге айҙар буйына үтмәй, хроник төҫ ала икән, бауыр, бөйөр эшмәкәрлеге, матдәләр алышыныуы боҙолған булыуы ихтимал. Ҡайһы берәүҙәргә һалҡындан йәки һыуыҡтан да кесерткән биҙгәге сыға. Был сирҙең нервылар ауырыуы менән дә бәйле булыуы бар. Кесерткән биҙгәген өйҙә дауалау өсөн тәүҙә нервы ҡуҙғыуын тынысландырырға кәрәк. Ашҡаҙанды таҙартыу ҙа файҙа бирә. Майлы иттән, ҡыр ҡошо итенән, әсе ризыҡтарҙан баш тартығыҙ.

❖ Сельдерей тамырын ҡырғыстан ҡырып, һутын һығып алырға. Көнөнә 2-3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-2 балғалаҡ эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*✓ Арыған ҡатын-ҡыҙҙарға шуны әйтке килә: "Ял итегеҙ, ирҙәр эшен ирҙәрегеҙгә ҡалдырығыҙ. Беҙҙең төп бурыс - ғаиләбеҙҙе ҡарау, ирҙе илһамландырыу, балалар тәрбиәләү, ә башҡаһы яйлап килер, иншаллаһ..."*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҠАНҒА - ЙӘН...

## йәнгә - аң

**Күк йүтәлде - күгәрсен ите, уның ҡаны, йөрәге, шулай уҡ күк төҫтәге кәзә һөтө дауалай, тигән ышаныу булған. Бала йәки өлкән кеше ныҡ ҡурҡҡанда күгәрсендең йөрәген бешереп ашатҡандар. Әгәр ҙә тыуған балалар үлеп торһа, яңы тыуған сабыйға эттең һөтөн имеҙгәндәр.**

Һауа анаһы - күҙҙәр ауырыуын һуйылған малдың башы менән кешенең күҙҙәһе уратып имләгәндәр. Аҙаҡтан был башты берәй етем әбейгә бирергә кәрәк. Ул доғалар уҡып, уны бешереп ашарға тейеш. Кәкүк саҡырғанда өс йомортҡа ашаһаң, зәңгенән ҡотолаһың. Биҙгәк менән ауырығанды ҡолондоң муйынындағы ҡан тамырынан алынған ҡан менән дауалағандар, ул саҡта түбәндәгесә һамаҡланған:

*Тәнгә - ҡан,*
*Ҡанға - йән,*
*Йәнгә - аң.*
*Име-томо шул булһын.*

Һыу сәсәге сыҡҡан мәлдә ярма һәм тоҙҙо һыуға ташлайҙар:

*Һыу атаһы Сөләймән,*
*Һыу инәһе Һыубикә.*
*Мине тотма, шуны тот,*
*Тфү, тфү, тфү!*

Бил ауыртҡанда өс ғаиләнең төрлө йәштәге (өлкән, уртансы, кинйә) балалары өй һайын йөрөп, биртек йыйған. Был өс бала урынына ике бала, йәки ғаиләләге өлкән бала, шулай уҡ етем бала йәки өлкән йәштәге ҡатын май, ҡатыҡ, икмәк, сәй, ҡорот һәм башҡа ризыҡ йыйырға сыға алған:

*Улым биле ҡатыҡҡан,*
*Ҡатыҡ һорап йөрөйөм.*
*Киленем биле биртеккән,*
*Биртек һорап йөрөйөм.*
*Һөт булһа ла ҡойоғоҙ,*
*Һыу булһа ла ҡойоғоҙ,*
*Ни булһа ла һалығыҙ.*

Йыйылған май менән билде майлағандар, ҡалған биртек ашын ауырыу ашаған. Ҡайһы бер урындарҙа биртектең бер өлөшөн тәүҙә эткә биргәндәр. Әгәр кемдеңдер арҡаһы ауырта икән, ул үҙе тимер һауыт алып, ете өйгә инеп сыҡҡан. Ҡайһы өйҙә ашап ултыралар, ул улар менән бергә ултырып, әммә үҙенең һауытына һалып ашарға тейеш. Ошонан һуң ауырыуға еңеллек килә.

Ризыҡтар гигиена һәм косметик сара булараҡ та ҡулланыла. Сәс ҡуйы булып үҫһен өсөн уны ҡатыҡ, йомортҡа һарыһы менән йыуғандар. Ҡатыҡты биткә һөрткәндәр. Тире сәләмәт булһын өсөн мунсала тирегә һары май, бал һөрткәндәр.

Айыу үте дауалау көсөнә эйә, тип иҫәпләнгән. Уның менән билде, ревматизм мәлендә быуындарҙы ыуғандар. Мал һуйғанда малдың үт ҡыуығын алып, киптергәндәр. Кәрәк саҡта уны һыуға болғап, эскәндәр. Йөрәк болғанғанда киптерелгән йылан тиреһенән әҙерләнгән төнәтмә эскәндәр. Традицион медицинала мейес тә ҡулланылған. Ҡурҡҡан йәки атламай башлаған (быжы), туҡтамай илаған баланы икмәк бешергәндән һуң өс тапҡыр мейес ауыҙына алып киләләр. Мейескә ултыртып, бүҫерҙе лә дауалайҙар.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Аҙағы).**

*УЙҘАРЫМДАН УЙЫЛАМ…*

**"Киске Өфө"нөң былтырғы бер һанында "Уйҙарымдан уйылам…" рубрикаһында "Ҡыҙ балаҡайымды ҡыҙғанам…" тигән баш аҫтында Айбикә исемле автор заман ҡыҙҙары яҙмышы, етлекмәгән кейәүҙәр тураһында һөйләшеү башлағайны һәм Айгөл Ахунова исемле автор уға ҡушылып, үҙ фекерен әйткәйне. Был сығыштар мине үтә тулҡынландырһа ла, үҙ ваҡытында ғына ҡулға ҡәләм алыу форсаты булманы. Һуңлап булһа ла яҙам әле үҙ фекеремде.**

# ҺАМАН ДА ШУЛ...

## етлекмәгән кейәүҙәр тураһында



...Бер саҡ атайым менән әсәйемдең шундай һөйләшеүенә шаһит булынғайны: "Атай йортонда күнегелгән мөхиттә үҫкән ҡыҙ бала, кейәүгә сыҡһа, сит ғәҙәттәр солғанышына барып эләгә һәм шуларға яраҡлашырға тейеш була. Беҙ ҙә ҡыҙҙар үҫтерәбеҙ бит, үҙҙәренә яраҡлаштырам, тип, кем генә ҡыйырһытмаҫ бәпкәләребеҙҙе..." Бына шулай, ара-тирә беҙҙең, ҡыҙ балаларының яҙмышын уйлап көрһөнөүен ишеткеләй инем уларҙың. Тормошта осраясаҡ һынауҙарҙы, ауырлыҡтарҙы үҙ баштарынан үткәргәс, уларҙың беҙҙең өлөшкә лә төшәсәген һиҙеп, күңелдәре болоҡһоғандыр инде.

Шуға ла беҙҙе бар яҡлап ҡурсырға тырышҡандарҙыр. Әсәйем гел генә: "Үҙ донъяһын көткәндә лә арып-талырҙар әле, миндә саҡта йоҡоларын туйҙырып ҡалһындар", - тиер ине. Әлбиттә, сиртке тейҙермәй, һикереп төшөп яҡлап, беҙҙе аҡлап ҡына, иркәләтеп кенә лә торманы улар. Әсәйем эш ҡушһа, "Эшләгәнең миңә булһа, өйрәнгәнең үҙеңә" тигән аҡылды йыш ҡабатлар ине. Уларҙың "Барынса - байрам", "Булғанына - шөкөр", "Сабырлыҡтың төбө - һары алтын" кеүек әйтем-мәҡәлдәре лә беҙҙе тормошҡа әҙерләүсе төп аҡыл булғандыр, тим. Аҡты ҡаранан айырырға, буласаҡ тормош иптәштәребеҙҙе эске һиҙемләү аша һайларға кәрәк, тигән ишараны ла оҙон өгөт-нәсихәттәргә бирелмәй генә, үҙҙәренең хәл-торошталары аша йәиһә теге йәки был күренешкә мөнәсәбәте менән белгертеп ҡуйырҙар ине.

Уңышҡа юл еңел генә бирелмәне бирелеүгә. Әммә беҙҙең һәр беребеҙ лайыҡлы ир ҡатыны булдыҡ. Апалыһеңлелеләрҙән икәүебеҙ ҡыҙ балалар тәрбиәләп үҫтерҙек. Дөрөҫөн әйткәндә, ихласлығыбыҙға яуап итеп, хәләл ефеттәребеҙҙән ысын ир-егеттәргә хас киң күңеллелек, изгелек күрмәнек. Әммә ғаиләбеҙҙә ыңғай өлгө бар: бер кейәүебеҙ тормоштоң иң ауыр йөгөн үҙе тарта, ғаиләһен бер саҡта ла мохтаж итмәй, борсолдормай, малын-аҡсаһын табып тора - күҙ тейә күрмәһен. Ул үҙе кеүек ысын ир булырҙай улдар үҫтерҙе. Ә беҙҙең, минең һәм һеңлемдең, ирҙәре, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҙ кейәүҙәренә ыңғай өлгө була алманы. Кейәүҙәр ҡайны тупрағынан ярала, тигәндәре дөрөҫкә сыҡты ла ҡуйҙы: ҡыҙҙарыбыҙ өлөшөнә төшкән ир-егеттәр ҙә ысын ирлекте аҡлай алманы.

Береһенең ҡарап торғанда төҫ-башы, буйы-һыны бынамын тигән. Юғары белемле, аңлы ғына егет һымаҡ. Әммә бирелеп китеп эскене яратты. Төн уртаһына тиклем эшләгән урынында эсеп ятты, йыш ҡына иптәштәрен өйгә тейәп алып ҡайтып, эске табыны ойошторҙо. Өйҙә икмәк бармы, балалар туҡмы, эштән ҡайтышлай ике бәләкәй улын балалар баҡсаһынан алып, ике ҡулы төйөнсөктән бушамаған ҡатынының хәле нисек - ундай һорауҙар башына ла инеп сыҡмағандыр кейәүебеҙҙең. Һәйбәтләп ултырып һөйләшергә итһәң, "Өйрәтмә, һин минең уҡытыусым түгел!" тип кенә ҡуйыр ине. Араҡынан айырырға тырышҡаныбыҙ өсөн беҙ уның беренсе дошманына әйләндек. Ғаиләһе емерелһә лә, кейәүебеҙ араҡыһына тоғро ҡалды. Тәкәбберлеген дә ҡәнәғәтләндерҙе: "Мин - ир, әйттем - бөттө". "Төҙәләм, балаларым хаҡына", тип бер үкенһә ине, исмаһам...

Бындай "маңҡа" ирҙәр милләтебеҙгә мәртәбә өҫтәмәй, киреһенсә, үҫешебеҙҙе тотҡарлай, тип уйлайым. Тик ундайҙар бигерәк ишәйеп китте бит. Шуға ла атай-әсәйҙәрҙең хәле аңлашыла инде: ҡыҙ балаҡайымды ҡыҙғанам, тип әйтмәй сараһы юҡ.

Хәйер... Бынамын тигән ир бала тәрбиәләгән атай-әсәй ҙә тәрбиәһеҙ, ҡатын булырға ла, әсә булырға ла өлгөрөп етмәгән килендәрҙе күҙ алдына килтереп, "Ир балаҡайымды ҡыҙғанам", тип уфтана торғандыр инде...

**Илһөйәр ТУҒАНОВА.**

*ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА...*

# ИРЛЕК БУРЫСЫН...

## ирҙәр үтәһен, әйҙә

**Ҡатын-ҡыҙ, әхирәттәр ауыҙынан "Арыным" тигән һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә. Ысынлап та, аҙнаһына 5 көн, көнөнә 8 сәғәт эшләү, шуның өҫтөнә өйҙәге һәм ғаиләләге барлыҡ мәшәҡәттәр ҡатын-ҡыҙ иңенә ауыр йөк булып ятҡан түгелме? Феминисткалар үҙ хоҡуҡтары өсөн көрәшкәндә ошондай ҡыйынлыҡтар хаҡында күҙ алдына килтерҙеме икән? Ә һуңғы йылдарҙағы ғаилә тарҡалыу осраҡтары, балаларҙан баш тартыу, аборттар һаны артыуы ҡайҙан килә, уйланғанығыҙ бармы?**

Ошо һорауҙарға яуап эҙләү мине шундай һығымта яһатты: бөгөнгө заман йәмғиәтендә һәм ғаиләһендә ҡатын-ҡыҙҙың урыны уның тәбиғи асылынан ҡырҡа айырыла. "Ватандаш" журналында сыҡҡан мәҡәләһендә билдәле ғалимә Фирҙәүес апай Хисаметдинова элекке заманда башҡорт йәмғиәтендә ҡатын-ҡыҙҙың дәрәжәһе юғары булыуын билдәләй. Был дәрәжә, беренсенән, әсәлек бурысын атҡарыу менән, икенсенән, милли мәҙәниәтте йәш быуынға тапшырыусы роле менән, өсөнсөнән, йәмәғәт тормошонда һәм хужалыҡта баһалап бөткөһөҙ хеҙмәте менән, дүртенсенән, һуғыштар мәлендә дипломат функцияһын башҡарыуы менән билдәләнгән. Ә хәҙер иһә ҡатын-ҡыҙҙың бындай юғары дәрәжәһе тураһында һүҙ ҡуҙғатырға ла ҡурҡыта. Сөнки...

Ҡайһы арала, ҡайһы мәлдә шулай юғалтырға өлгөрҙөк дәрәжәбеҙҙе? Матди байлыҡты рухи байлыҡтан өҫтөн ҡуйған, милли йолаларыбыҙҙы һәм динебеҙҙе кире ҡаҡҡан мәлдән. Төп вазифабыҙ - әсәлекте инҡар иткән мәлдән. Ир-егет дәрәжәһен үҙебеҙҙең аяҡ аҫтына һалып тапай башлаған мәлдән...

Ҡайһы ата-әсә бөгөн ҡыҙ балаһын "Һин иң тәүҙә ҡатын-ҡыҙ, әсә булырға тейешһең!" тип үҫтерә икән? Әлбиттә, бар ундай матур ғаиләләр. Атай менән әсәйҙең мөхәббәтенә сорналып үҫкән ҡыҙ бала, ваҡыты етеп, кейәүгә сыҡҡас, ғаилә мөнәсәбәттәрен иғтибар үҙәгенә ҡуя, иренә терәк булырға тырыша. Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.): "Иң яҡшы ҡатын шул, уға бойорһаң - ул тыңлаусанлыҡ күрһәткән ҡатын. Ире эргәһендә юҡ саҡта үҙен һәм иренең байлығын һаҡлаған ҡатын", - тигән. Моғайын, шундай ҡатындар һаны артһа, илебеҙҙә айырылышыуҙар, аборттар һаны кәмер ине.

Ә инде ирҙе тыңлауға килгәндә... Ни өсөн беҙҙең илдә ирҙәр араһында хәмер эсеүселәр күп? Һәр күренештең үҙ сәбәбе бар: психологтар тикшеренеүҙәренән аңлашылыуынса, ҡатын менән ир араһында мөхәббәт, үҙ-ара ихтирам булмауы ирҙе эскегә килтерә. Ғөмүмән, ғаиләләге мөнәсәбәттәр тулыһынса ҡатын-ҡыҙҙан тора. Замана ҡатын-ҡыҙы эштә ирҙәр менән бер тиң эшләй, улар менән конкуренцияға инә, кейем дә ирҙәрҙеке... Эштән һуң өйөнә ҡайтҡас та ул шул уҡ ролдән сыға алмай: иренә бойора, ҡысҡыра, аҡыл өйрәтә, уның әйткәнен иһә һанға һуҡмай. Шулай барлыҡҡа килә лә инде ҡатын-ҡыҙ таҡмағына бейегән бисә фиғелле ирҙәр, йә ирлеген иҫбатлайым тип, ситтән бәхет эҙләүселәр. Шуға күрә, ирҙәрҙең ир-егет асылынан алыҫлашыуына беҙ ҡатын-ҡыҙ асылынан китеүебеҙ менән ғәйепле.

Шулай итеп, арыған ҡатын-ҡыҙҙарға шуны әйтке килә: "Ял итегеҙ, ирҙәр эшен ирҙәрегеҙгә ҡалдырығыҙ. Беҙҙең төп бурыс - ғаиләбеҙҙе ҡарау, ирҙе илһамландырыу, балалар тәрбиәләү, ә башҡаһы яйлап килер, иншаллаһ..."

**Азалия ДИЛМӨХӘМӘТОВА.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# БАШҠОРТОСТАНЫБЫҘ...

## Беренсе донъя һуғышы осоронда

**Тарих фәндәре кандидаты, Рәсәй Стратегик тикшеренеүҙәр институтының өлкән хеҙмәткәре Рәмил Насибулла улы Рәхимов Беренсе донъя һуғышы осорондағы Башҡортостан менән таныштырыуын дауам итә.**



### Икмәк көрсөгө

Ҡайһы бер тарихсыларҙың фекере буйынса, 1917 йылдағы Февраль революцияһы сәбәптәренең береһе булып илдә икмәк етмәү тора. Ысынында, был дөрөҫлөккә тап килмәй. Беренсе Донъя һуғышы осоронда Рәсәйҙә уңыш мул була. Волга буйында, Себерҙә, Уралда, шул иҫәптән Башҡортостанда икмәк ҡытлығы күҙәтелмәй. Бәлки, яҡшы тимер юлдарының булмауы арҡаһында был икмәк Петроградҡа ла, Мәскәүгә барып етмәйҙер (Ғөмүмән, илдә транспорт бәйләнеше яҡшы булмауы ул осор өсөн ҙур проблема була. Ошо арҡала, мәҫәлән, һуғыш ваҡытында Францианан Рәсәй армияһы өсөн ебәрелгән ҡорал, патрондар тулыһынса ғәскәрҙәргә барып етмәй, Архангельск портында тау булып өйөлөп ята. Улар һуңынан ғына, Граждандар һуғышы осоронда ҡулланылыш таба).

Һуғыш башланыу менән хөкүмәт, икмәккә хаҡтар артмаһын өсөн, уларҙы нығыта, йәғни үҙгәрмәгән хаҡ ҡуя. Был хаҡ тәүге осорҙа насар ҙа булмай. Ләкин һуғыш һуҙылған һайын, илдә башҡа әйберҙәргә лә хаҡтар арта, инфляция башлана, икмәкте һатыу килемһеҙгә әйләнә. Унан килгән аҡсаға хужалыҡ ҡоралдарын да, туҡыма ла һатып алыу мөмкинлеге булмай. Бындай шарттарҙа икмәк үҫтереүсе ни эшләй? Ул быйыл игенде һатыу отошһоҙ, шуға ла мин уны һатмаясаҡмын, уны яҡшы һаҡлағанда бер ике йыл эсендә генә иҫкермәйәсәк, тип уйлай. Хәлдәр яҡшырып, имәккә хаҡтар артҡас, баҙарға сығарасаҡмын, тигән ҡарарға килә. Ул йылдарҙа крәҫтиәндәрҙең складтары иген менән тулы була. Ләкин хөкүмәттең нығытылған хаҡ ҡуйыуҙан ғибәрәт сәйәсәте проблемаларға килтерә. Бәлки, хөкүмәтте эҙемтәләрҙе алдан күрә белмәүҙә ғәйепләргә лә ярамайҙыр, сөнки был ҡарар ҡабул ителгәндә бер кем дә һуғыш оҙаҡҡа һуҙылыр, тип уйламай.

### Дин әһелдәре фронтта

Фронтҡа дин әһелдәре лә әүҙем рәүештә йәлеп ителә. Хатта ғәскәрҙәрҙә ошоноң өсөн айырым ставкалар ойошторола һәм руханиҙар менән муллалар эштәре өсөн эш хаҡы ала. Дин әһелдәре яугирҙарҙың мораль хәлен күтәреп тора, ғиәбәҙәттәр үткәрә, яралылар янында була, кешене ерләгәндә ҡатнаша, йыназа уҡый. Дин әһелен частҡа тәғәйенләү тиктомалдан эшләнмәй. Айырым кеше буйынса фекер уртаҡлашыу, хат алышыуҙар бара. Мулла йәки христиан руханийы хаҡында ентекләберәк белер өсөн командование ошо дин әһелдәре йәшәгән ерҙәргә хаттар ебәрә. Был хаттарҙа кандидаттың белеме, уның ни тиклем ышаныслы булыуы хаҡында мәғлүмәт ебәрелеүен һорайҙар. Бынан тыш, дин әһелдәре фронтта ғына түгел, тылда әүҙем патриотик тәрбиә эше алып бара. Улар яу ҡырында булған яҡташтарына ярҙам итер өсөн мәхәлләләренән аҡса йыйып, фронтҡа ебәрәләр.

Совет осорондағы ҡайһы бер тарихсылар әйтеүенсә, һуғыш уйланылмаған, планлаштырылмаған, хаос рәүешендә барған, халыҡта популяр булмаған, тигән ҡараштары дөрөҫкә тап килмәй. Әлбиттә, баштары эшләмәгән, полктарын пулемет уты аҫтына индереп ҡырған дыуамал офицерҙар ҙа була. Ләкин һуғыштың һәр аҙымы мөмкин тиклем уйланып эшләнгән, дин әһелен тәғәйенләү буйынса хат алышыуҙар, бәхәсләшеүҙәр, фекер алышыуҙар быға йәнә бер миҫал.

### Хәрби наградалар

Беҙҙең яҡташтар күп орден-миҙалдарға лайыҡ була. Улар араһында Георгий тәреләре (айҙары ла) була. Ләкин ошо миҙалдарҙы алған кешеләрҙең ғаиләләрендә лә, хатта музейҙарҙа ла был наградалар һаҡланмаған тиерлек. Сәбәп шунда: Граждандар һуғышынан һуң, 20-се йылдар башында илдә ҡоролоҡ була. Ул бигерәк тә Волга буйы, Уралда, йәғни беҙҙең төбәктә көслө була. Көмөштән булған ошо орден-миҙалдар аҙыҡ-түлеккә алыштырыла. Шулай уҡ 30-сы йылдарҙағы репрессиялар осоронда был наградаларҙың күп өлөшө йәшерелә, юҡ ителә. Ә инде ҡалғандары Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында илдең оборона фондына тапшырыла.

### Күпме кеше ҡатнашҡан?

Башҡортостандан күпме кеше һуғышта ҡатнашҡанын әйтеүе ҡыйын. Ул ваҡытта хәҙерге республика территорияһының күп өлөшө Өфө губернаһына ҡарай. Ләкин, белеүебеҙсә, бар Өфө губернаһы ла бөгөнгө көндә Башҡортостанға инмәй. Бөгөлмә, Миңзәлә өйәҙҙәре Татарстанға, Златоуст Силәбе өлкәһенә ҡарай. Шулай уҡ бөгөнгө Башҡортостанда элекке Ырымбур өлкәһенә ҡараған райондар ҙа бар. Шуға ла аныҡ ҡына һандарҙы әйтеп булмай. Тикшеренеүселәр билдәләүенсә, яҡынса 18 йәштән алып 50 йәшкә тиклем ир-егеттәрҙең 40 проценты һуғышта ҡатнаша. Башҡорттар тураһында ла аныҡ ҡына әйтеп булмай. Сөнки күп башҡорттар, Өфө губернаһынан тыш, Ырымбур, Һамар һәм башҡа губерналарҙан фронтҡа ебәрелә.

### Һығымталар

Һуғыш ҡыҙыл командирҙар тарафынан ентекләп өйрәнелә. Был тәжрибә Бөйөк Ватан һуғышында ҡулланыласаҡ. Нисек итеп фронттарға бүленеү, тактик элементтар, тимер юлдарҙы, тылды әүҙем рәүештә хәрби хәрәкәттәрҙә ҡулланыу тап Беренсе донъя һуғышынан ҡалған һабаҡ була. Шулай уҡ ҡасаҡтарҙы урынлаштырыу, әсирҙәрҙе, йәштәрҙе төрлө эштәргә йәлеп итеү, хәрби сәнәғәт комитеттарын төҙөү, барыһы ла 1914-1918 йылғы һуғыш тәжрибәһенә таянып эшләнә.

Бөгөнгө көндә был һуғыш тураһындағы хәтирәне йәмәғәтселек аңына ҡайтарырға кәрәк. Беренсенән, төрлө-төрлө булған Рәсәй халҡы, милләтенә, диненә ҡарамайынса, ошо хәрби кампанияла ҡатнаша, берҙәм, бүленмәгән ил өсөн сығыш яһай. Икенсенән, Рәсәй был һуғышты теләмәй, уны башламай, бер кемгә лә һуғыш иғлан итмәй. Ләкин кисектереп булмаҫлыҡ ваҡиғалар килеп сығыуы арҡаһында уға ҡушылырға мәжбүр була. Беҙгә ошо осор, ғөмүмән, тарихыбыҙ өсөн оялырға ярамай. Эйе, бик күп ҡорбандар бирелеүгә ҡарамаҫтан, большевиктарҙың, Лениндың Германия менән Брест килешеүен төҙөүе арҡаһында, һуғыш башында бергә булған Антанта буйынса илдәр еңһә лә, илебеҙ еңеүселәр рәтендә булмай.

Яңы конфликттарҙы тоҡандырыу буйынса истериялар килеп сыҡҡанда, һәр ваҡыт анды айыҡ тоторға кәрәк. Үткән йәй бындай ваҡиғаларға бай булды, бәлки, айырым ил етәкселәренең уйлап эш итеүҙәре генә был конфликт тоҡанып китеүҙән һаҡлап ҡалды. Беренсе Донъя һуғышының башланып китеүенә 100 йыл тулыу айҡанлы был ҡан ҡойғос мәхшәрҙең хәтирәләре лә аҙымдарҙы уйлап эшләргә этәргәндер. Ысынлап та, һуғыш теләүселәр күп, уны башлап ебәреү ҡыйын түгел. Ләкин һуңынан был проблеманы хәл итеү ҡыйын. Дошманлашҡан илдәр, Германия менән Рәсәй кеүек, ваҡыт үтеү менән ярашасаҡ, ваҡыт үткәс, Украина менән Рәсәй араһында ла мөнәсәбәттәр яҡшырасаҡ. Әммә ваҡытлы конфликт ҙур ҡорбандарға килтерһә, был ҡорбандарҙы бер кем дә ҡайтара алмаясаҡ.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ яҙып алды.**

**(Аҙағы. Башы 40-42-се һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Әгәр ҡатын ире менән йәшәргә теләмәүе йәки йәшәй алмауы тураһында белдереп, ире уны кире ҡайтарырға риза булһа, ҡатындың туғандары түләнгән ҡалымды кире ҡайтарырға тейеш. Әгәр ир ҡатынын кире ҡайтарырға ризалашмаһа һәм оло-лар ҡатындың дәлилдәрендә айырылышырлыҡ сәбәптәр күрмәһә, ғаилә айырыла, әммә ҡатындың туғандары ҡалымды икеләтә күләмдә кире ҡайтара. Әгәр ир икеләтә ҡалым алыуҙан баш тартһа, ҡатын айырылып, иректе була, әммә ҡабат кемгәлер кейәүгә сығыу хоҡуғын юғалта. Айырылышҡанда балалар һәр саҡ атаһы менән ҡала һәм бары тик уның ризалығы менән генә ҡатын кемделер үҙенә ала. Был ҡағиҙәләр барлыҡ башҡорттар тарафынан да ҡәтғи үтәлә.

Ҡатындар баланы, ғәҙәттә, аш өйөндә таба. Әгәр ғаиләлә бер генә өй булһа, унда бала табыусы ҡатын менән кендек инәһе генә ҡалып, башҡаларҙы өйҙән сығаралар. Әгәр бала табыу ваҡыты оҙаҡҡа һуҙылһа, быны шайтан сабыйҙы әсә ҡарынынан сығармай тота, тип баһалап, насар көстө ҡурҡытыр өсөн бала табыусы ҡатындың ҡолаҡ төбөндә ҡоралдан аталар. Был ғөрөф-ғәҙәт Урал һәм Урал аръяғы башҡорттарында киң таралған. Бик һирәк осраҡта баланы ауыр табыусы ҡатынды бүре ирене аша үткәрәләр. Бының өсөн бүренең ауыҙ ситендәге тирене ҡырҡып, уны ныҡ итеп тарттырып киптерәләр һәм барлыҡҡа килгән ҡулса аша бала табыусы ҡатынды сығаралар. Шулай уҡ ҡатындың арҡаһынан өҫтән аҫҡа табан шәшке тырнағы менән йөрөтәләр.

Д. П. Никольский әйтеүенсә, бала табыу оҙаҡҡа һуҙылғанда, йөклө ҡатынды йөрөргә мәжбүр иткәндәр йәки кендек инәһе уның эсен ыуған; эсен ныҡ итеп бәйләгәндәр һәм ҡатынды ян-яҡҡа әйләндергәндәр. Бала тыуғандан һуң бала яҭҡылығын кендек инәһе ихата артына алып барып, мотлаҡ кендек яғын өҫкә ҡуйып, бик тәрәнгә күмә. Әгәр бала яҭҡылығы сыҡмаһа, ҡатындың эсен ыуып, уға эс йомшартыусы саралар биргәндәр.

Бала табыусы ҡатын бушанғандан һуң биш көн урындан тормай, һуңынан уны мунсаға алып барып йыуындыралар, таҙа кейем кейендерәләр. Ҡатын булараҡ үҙ бурысын ул бала тапҡандан һуң 40 көн үткәс кенә үтәй алған, сөнки ошо ваҡыт арауығында, күрем ваҡытындағы кеүек үк, таҙа түгел тип һаналған.

Күрем ваҡытында ҡатын-ҡыҙ махсус ыштан һәм күлдәктә йөрөгән. Был ваҡытта ул ашарға әҙерләмәгән, намаҙ уҡымаған, сөнки, башҡорттар күҙаллауынса, уның теләктәре Аллаһы Тәғәләгә барып етмәгән. Ошо осор үткәс, ул ҡабат үҙенең көндәлек кейемдәрен кейгән.

Бала донъяға килеү менән кендек инәһе уны йыуындыра, башын йәйлап бәйләй, әгәр малай тыуһа, шатлыҡлы хәбәрҙе шунда уҡ атаһына еткерә. Бала тапҡан ҡатын урында ятҡанда туғандары һәм күрше-тирә уны күрергә килә һәм ҡайһыһы ризыҡ килтерә: май, ҡорот, икмәк, сәй, шәкәр һ.б. Бынан тыш, әгәр малай тыуһа, уға - янсыҡ йәки туҡыма, ҡыҙ тыуһа - түшелдерек бүләк итәләр.

✓ *Украина етәкселеге Ҡырымдағы халыҡты тормош баҫҡысының иң түбәненә тартып төшөрөргә теләне. Ләкин халыҡтың рухын һындыра алманы. Шул рух уларҙы Рәсәйгә ҡушылырға дәррәү күтәрҙе.*



# БАШҠОРТ ИЛЬӨЙӘРҘӘРЕ...

## Ҡырымда ла башҡорт булып йәшәй

**Күптән түгел Рәсәй составына яңы субъект - Ҡырым ярымутрауы ҡушылды. Быға тиклем, ысынлап та, ул ғаиләһенән ҡыр тибелгән бала хәлендә ине, хәҙер ҡабат тыуған ояһына һыйынды, тиергә мөмкин. Сөнки элек-электән Ҡырымда Рәсәй императорҙарының резиденциялары булған. Әммә иң мөһиме: Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға өс ай ҡалғас, СССР, Англия, АҠШ лидерҙары Сталин, Рузвельт һәм Черчилль Ҡырымдағы Ливадия һарайында донъяның артабанғы ҡоролошо мәсьәләһе буйынса осрашыу үткәрә. Тап шул сарала БМО ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул ителә. Тимәк, Ҡырымды, һис шикһеҙ, тыныслыҡ утрауы, тип атарға мөмкин. Ә бөгөн ҡыр тибелеп йөрөгәндән һуң ҡабат өйөнә ҡайтҡан субъекттың көнкүрешен, ундағы милләттәштәребеҙҙең йәшәйешен Ҡырымдың "Иҙел - Урал" Башҡорт мәҙәниәте үҙәге рәйесе Даларис ИМЕЛБАЕВ һәм уның "уң ҡанаты" Рәйлә ханым менән асыҡларбыҙ.**

**Даларис Имелбаев:** Бөгөн Ҡырымда 2 мендән ашыу башҡорт йәшәй. Уларҙы тапҡас, танышҡас, күп кешеләрҙең яҙмышы Бөйөк Ватан һуғышына бәйле икәнлеге асыҡланды. Ҡырым татарҙарын депортациялау һөҙөмтәһендә эш ҡулдары кәмегәс, һуғыштан һуң күптәрҙе, шул иҫәптән башҡорттарҙы ла, Ҡырымға эшкә ебәргәндәр. Милләттәштәр араһында Севастополь ҡалаһын тергеҙеүҙә ҡатнашҡандар, хәрби хеҙмәттә булып тороп ҡалыусылар, улар араһында адмирал, беренсе, өсөнсө ранг капитандары, мичман-прапорщиктар бар. Краснoперекопскта Салауаттан, Стәрлетамаҡтан бындағы сода заводына эшкә килеп тороп ҡалған инженерҙар, операторҙар йәшәй. Элек Ҡырым Украина юрисдикцияһында булғас, барыһы ла Рәсәйгә ҡайтырға ынтыла ине, хәҙер Рәсәйҙең 82-се төбәге булып киткәс, иркен тын алдылар. Украинаның Донецк, Луганск өлкәләрендә яҡташтарыбыҙ бик күп. Унда һуғыштан һуң барып төпләнгән шахтерҙар ғаиләләре йәшәй. Уларҙың тормошо бик аяныс. Улар өсөн борсолабыҙ. Һәр саҡ бәйләнештә торабыҙ.

**Рәйлә Имелбаева:** Ә үҙебеҙҙең Ҡырымға барып сығыуҙың сәбәбе Даларис инде. Ул унда хәрби хеҙмәттә булғайны, шунан тороп ҡалдыҡ. Өс балабыҙ ҙа Ҡырымда тыуҙы. Хәҙер ейәндәребеҙ бар. Тәүҙә Ялтанан 40 км ситтә йәшәнек. Унда санаторий бар ине. Даларис патрулгә сыҡһа, санаторий бинаһының тәҙрәләренә ҡарап: "Бармы бында башҡорттар?"- тип ҡысҡыра икән. Шунан ҡайта ла, борсолоп һөйләй: "Санаторийҙа бер башҡортто ла тап итмәнем, берәү ҙә тәҙрәнән тауыш бирмәне", - ти. Мин: "Башҡорттар булһа ла, автоматлы һалдаттарға кем тауыш бирһен!" - тип көлә торғайным.

**▸ Һуғыш һөҙөмтәһендә емерелгән ҡалаларҙы аяҡҡа баҫтырырға тип килеп, шунда төпләнеп тороп ҡалған төрлө милләт вәкилдәренә депортацияланған ҡырым татарҙары бөгөн ниндәй ҡараштa, ниндәй мөнәсәбәттә?**

**Даларис Имелбаев:** Уларҙың күңелендә һәр ваҡыт үпкәләү, ҡәнәғәтһеҙлек йәшәй. Был аңлашыла, әлбиттә. Әммә бөтәшкән йәрәхәттәребеҙҙе гел тырнап йөрөһәк, унан һәр ваҡыт ҡан һарҡып торасаҡ бит. Беҙ киләсәккә күҙ төбәргә тейешбеҙ. Мин уларға: "Үҙегеҙҙе матур яҡтан күрһәтергә, әхлаҡи юғарылыҡҡа күтәрелергә тейешһегеҙ", - тип тылҡыйым гел. Рәсәйгә ҡушылыу тураһындағы референдумға Ҡырым татарҙарының ана шул үпкәләү тойғоһонан арынмаған 40 проценты тауыш бирергә килмәне.

Тағы шуны әйтер инем: Башҡортостанда ҡайһы берәүҙәр Ҡырымға ярҙам ебәрелеүенә ҡәнәғәтһеҙлек белдерә, тип ишеттек. Беҙ 23 йыл Украина дәүләтендә йәшәнек, Украина Ҡырымды бар яҡлап таланы. Балыҡ комбинаты юҡҡа сыҡты, күп предприятиелар ябылды, кешеләргә хәҙер эш юҡ. Бик ауыр йәшәгәндәр, мохтаждар күп. Ҡырымға килгән ярҙам ошо мохтажлыҡ янында бик аҙ ғына ул. Шулай ҙа беҙ был ярҙамға ла шатланабыҙ.

**Рәйлә Имелбаева:** Әлбиттә, Ҡырым татарҙары менән беҙ бер туғандай йәшәйбеҙ, аралашабыҙ. Белогорск районында үткән һабантуйҙа милли кейемдә йөрөгәйнек, "Һеҙ, башҡорттар, беҙгә ғүмерҙә лә күрмәгән байрам ойошторҙоғоҙ", тип, рәхмәт әйтеп киттеләр. Шунда бер ҡатын: "Ирем афған һуғышы ветераны. 9 Майға ветерандарға күстәнәс алып килделәр. Башҡорт балын ишетеп кенә белә инем, уны беренсе тапҡыр тәмләп ҡарау бәхетенә өлгәштек. Аҙыҡ-түлегенән бигерәк, башҡорттарҙың шундай иғтибар бүлеүе күңелгә яҡын булды", - тип илап һөйләне. Ысынлап та, Украина етәкселеге Ҡырымдағы халыҡты тормош баҫҡысының иң түбәненә тартып төшөрөргә теләне. Ләкин халыҡтың рухын һындыра алманы. Шул рух уларҙы Рәсәйгә ҡушылырға дәррәү күтәрҙе. Әле бына төрлө төбәктәрҙән килгән гуманитар ярҙам да йәшәү дәртен арттыра.

Эйе, Аллаға шөкөр, Ҡырымда һуғыш булманы. Ләкин барыбер хәүеф аҫтында йәшәнек. Хатта референдум ваҡытында афған ветерандары, улбыл була ҡалһа, тип, һаҡҡа баҫты. Ярай әле, провокациялар булманы, имен генә үтеп китте. Әлеге көндә лә, уйлап ҡараһаң, Украина Ҡырымды блокадала тота. Һыу каналын яптылар. Йөҙәрләгән гектар дөгө яландары буш ята. Ҡасандыр ошо яландар тотош Украинаны туйындыра ине. Әммә барыбер Аллаһы Тәғәлә ғәҙел: дөгө сәсә алманыҡ, уның ҡарауы, арпа, бойҙай, емеш-еләк унды.

**Даларис Имелбаев:** Башҡортостан шефлыҡ иткән Белогорск районында Башҡортостан егеттәре республиканан алып килгән комбайндар менән иген урҙы. Улар эргәһенә лә, мәктәптәрҙе, балалар баҡсаларын ремонтлаған эшселәр янына ла барып, күрешеп, һөйләшеп йөрөнөк. Улар - беҙҙе, беҙ уларҙы күреп шатландыҡ.

**▸ Хәҙерге заманда шундай күренеш ныҡ күҙгә салына: ҡушҡанды барыһы ла эшләй, ҡушмайһың икән - берәү ҙә инициатива күрһәтергә ашыҡмай. Ә бына һеҙҙең шулай йәмәғәт эше менән йөрөүегеҙ күңел талабымы?**

**Даларис Имелбаев:** Бына мин - башҡорт балаһы. 60 йәшлек юбилейым булғанда ҡала хакимиәте башлығы Чехов исемендәге театрҙа мине гөлләмә, Маҡтау ҡағыҙы тапшырып ҡотланы. Ул бит миңә генә түгел, ә тотош башҡорт милләтенә, башҡорт йәмғиәтенә хөрмәт күрһәтте, тигәнде аңлата. Шулай булғас, нисек битараф булырға мөмкин йәмәғәт эштәренә. Ай һайын мотлаҡ ниндәйҙер бер сара үткәрәбеҙ. "Шишмә" фольклор ансамблебеҙ бар. Ҡурайсылар булмаған урында ҡурай тартып ебәрәм. Оҫта уйнайым, тип әйтә алмайым, әммә еренә еткерергә тырышам. Шуға, ҡайҙа барһам да, ҡурай - минең юлдашым. Берәй ергә саҡырһалар, ҡурайыңды алып кил, тип торалар. Бер туйҙа булдыҡ та, шунда бер рус ҡатыны: "Вы знаете, это не так просто мелодия, это - шум леса, пение птиц, журчанье речки, родничка, вся природа отражается в мелодии курая", - тине тулҡынланып. Бына шулай беҙҙең мәҙәниәтте аңлап ҡарауҙары ла яуаплылыҡ йөкмәтә, дәртләндереп ебәрә.

Рәйлә Имелбаева: Беҙҙә даими рәүештә туған телдәр фестивале үтә. Унда беҙ башҡорт телендә сығыштар әҙерләйбеҙ. Сығышыбыҙҙы йыр-бейеү менән бергә үрелдереп алып барабыҙ. Башҡа милләттәр беҙҙең йыр-моңдарыбыҙҙы шул тиклем ихтирам итә. Башҡорттарҙың энергетикаһы ныҡ көслө, тиҙәр. Ошондай мөнәсәбәт беҙгә көс бирә, һәр аҙымыбыҙ, һәр һулышыбыҙ ил өсөн, халҡыбыҙ өсөн булырға тейеш, тип йәшәйбеҙ.



***Башҡорт милләте үҙенең асылын, йөҙөн юғалтмаһа, тәкәбберләнмәһә, йөрәк йылыһын йәлләмәй өләшһә, ихлас, эскерһеҙ булһа, саф, таҙа уй-ниәт менән йәшәһә - башҡорт атамаһы уҡ бренд булырға лайыҡлылыр, тип уйлайым. Уҙған быуаттың 70-се йылдарында башҡорттоң кем икәнен, Башҡортостандың ҡайҙалығын белмәйҙәр ҙә ине. Хәҙер яҡшы беләләр. Республика Ҡырымға ярҙам күрһәтә башлағас, тағы ла нығыраҡ беләсәктәр. Белогорск районында хәҙер ҡымыҙ фермаһы тергеҙелә, Башҡортостандан белгестәр килде, ярҙам итәләр. Һабантуйҙарҙа ҡурай менән килһәм, сиратҡа тороп, интервью алалар, ҡыҙыҡһыналар. Башҡорт балы инде асылмаған ишектәрҙе астырырға һәләтле. Әлбиттә, тәү siratta бренд булып башҡорт атамаһы йөрөргә, башҡорт тиеү менән башҡалар был милләттең донъяға билдәле ҡымыҙы, аты, балы, ҡурайы һ.б. продукцияһы булыуын күҙ алдына килтерергә тейеш. Шуға күрә һәр башҡорт ошо милләт атамаһын ғорур күтәреп, уның данын арттырып, уның бренд кимәленә күтәрелеүенә үҙенең өлөшөн индерһен ине. Ялта ҡалаһында Башҡортостан кешеләренә өс таҡтаташ бар. Беренсеһе - Советтар Союзы Геройы Ғәли ағай Мәҙитовҡа, икенсе мемориаль таҡтаташ - яҙыусыбыҙ Ғәлимйән Ибраһимовҡа, өсөнсөһө ғалим, яҙыусы Рәүеф ағай Аҡчуринға.***

**Даларис Имелбаев:** Бер йылды һабантуйҙа бишбармаҡ бешерергә ниәтләнек тә, ит алырға аҡса етенҡерәмәй. Минең ике ағы ла таштан эшләнгән һәйбәт электр үткерләгесем бар ине. Ундайҙар шәп хужаларҙа ғына була. Шуны һатып, ит алып, халыҡты һыйланыҡ. Үҙебеҙсә шулай йолалар үтәп, милләттәштәргә күңелен күреп торабыҙ. Һабантуйҙарға ла буш ҡул бармайбыҙ. Һәр саҡ йыуаса алып барабыҙ. "Ҡурай" каналы (директоры - Айгөл Әхмәҙиева), ДТРК (генераль директоры - Рәмис Дәүләтбаев) даими ярҙам итә, төрлө дискылар ебәрә. Уларҙы беҙ кешеләргә таратабыҙ. Һабантуйҙарға кеше күп йыйыла. Олораҡтар Башҡортостан флагын үбеп китәләр. Улар үҙҙәрен ошо дәүләттең кешеһе итеп тоя һәм хистәрен шулай белдерә, башҡорт булыуҙары менән ғорурлана. Ысынлап та, беҙҙең халыҡ бик әҙәпле, кешелекле, ҡайҙа ғына булһалар ҙа, улар үҙҙәрен яҡшы яҡтан ғына күрһәтә. Ә мин үҙебеҙҙе Башҡортостандың иғлан ителмәгән илсеһе тип тоям. Әйткәндәй, йәмғиәтебеҙҙе Европала ла беләләр һәм мине ОБСЕ-нан Башҡорт һәм татар йәмғиәтенең тулы хоҡуҡлы вәкиле итеп тәғәйенләнеләр. Ойошма 20 йылдан ашыу эшләй, татыу, берҙәм, бер туғандар кеүек йәшәйбеҙ. Беҙҙең өсөн сит ерҙә шулай берҙәм, татыу, дуҫ йәшәү - иң мөһиме. Томансы ауылында әсәйем урынына ҡалған Шәмсикамал апайым: "Йәмәғәт эшендә ташлама, дөрөҫ юлды һайлағанһың. Тормошта ошонан да юғарыраҡ баҫҡыс юҡ. Халҡың өсөн йәшәгәндә генә бәхетле булырһың", - тигәйне. Уның был һүҙҙәре миңә фатиха кеүек.

**▸ Әлеге ваҡытта Башҡортостан брендын булдырыу буйынса баш ваталар, ғөмүмән, башҡорт тигән атама үҙе үк бренд булмаҫлыҡмы ни?**

**Даларис Имелбаев:** Башҡорт милләте үҙенең асылын, йөҙөн юғалтмаһа, тәкәбберләнмәһә, йөрәк йылыһын иҫәпләмәй өләшһә, ихлас, эскерһеҙ булһа, саф, таҙа уй-ниәт менән йәшәһә - башҡорт атамаһы үк бренд булырға лайыҡлылыр, тип уйлайым. Уҙған быуаттың 70-се йылдарында башҡорттоң кем икәнен, Башҡортостандың ҡайҙалығын белмәйҙәр ҙә ине. Хәҙер яҡшы беләләр. Республика Ҡырымға ярҙам күрһәтә башлағас, тағы ла нығыраҡ beләсәктәр. Белогорск районында хәҙер ҡымыҙ фермаһы төргеҙелә, Башҡортостандан белгестәр килде, ярҙам итәләр. Һабантуйҙарҙа ҡурай менән килһәм, сиратҡа тороп, интервью алалар, ҡыҙыҡһыналар. Башҡорт балы инде асылмаған ишектәрҙе астырырға һәләтле. Әлбиттә, тәү сиратта бренд булып башҡорт атамаһы йөрөргә, башҡорт тиеү менән башҡалар был милләттең донъяға билдәле ҡымыҙы, аты, балы, ҡурайы һ.б. продукцияһы булыуын күҙ алдына килтерергә тейеш.

Шуға күрә һәр башҡорт ошо милләт атамаһын ғорур күтәреп, уның данын арттырып, уның бренд кимәленә күтәрелеүенә үҙенең өлөшөн индерһен ине. Ялта ҡалаһында Башҡортостан кешеләренә өс таҡтаташ бар. Беренсеһе - Йәрмәкәй районында тыуған Советтар Союзы Геройы, авиация подполковнигы, Берлинды тәүгеләрҙән булып бомбаға тотоусы Ғәли ағай Мәзитовҡа, икенсе мемориаль таҡтаташ - яҙыусыбыҙ Ғәлимйән Ибраһимовҡа, өсөнсөһө ғалим, яҙыусы Аҡчуриндар нәҫеленән булған Рәүеф ағай Аҡчуринға.

Урта ҡул ғына шиғырҙар яҙам тиһәм дә, Украина, Рәсәй, Беларусь шағирҙары алдында ижадымды башҡортса-русса уҡып, сығыш яһап, диплома, Украина Мәғариф министрлығының, Бөтөн Украина конгресының рәхмәт хатына лайыҡ булдым. Башҡортостанды лайыҡлы кимәлдә күрһәтергә, милләтебеҙ тураһында мәғлүмәтте салыш көҙгө аша түгел, нисек бар, шуны еткерергә тырышабыҙ. Ҡайҙа ғына сығыш яһаһам да, беҙҙең, башҡорттарҙың иле - батырҙар иле, тип белдерәм. Намыҫ, илһөйәрлек - ул минең өсөн буш һүҙ түгел, ул кеше алдында йөкмәткеле икәнлегенде, әхлаҡ йәһәтенән юғары баҫҡыста торорға тейешлегенде һәр саҡ иҫкәртеп тора. Намыҫ - ул һинең көҙгөң. Уға даими ҡарағас, ул һиңә яңылышырға, һәлкәүләнергә мөмкинлек бирмәй. Нимәнелер саҡ ҡына яңылышыраҡ эшләһәң дә, шунда уҡ төҙәлергә тырышаһың. Үҙеңде түбән баһаларға кәрәкмәй. Һәр саҡ юғары кимәлдә булырға һәм шул планканан бер ҡасан да төшөргә ярамай.

Башҡортостанда булғанда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев "Ал да сәс нур халҡына" миҙалы тапшырҙы. Был награданы алғанда күҙҙәремә йәш килеп тығылды хатта. "Башҡортостаныма хеҙмәт итәм!" тип, хәрбиҙәрсә яуапланым. Был бүләкте Ҡырым башҡорт йәмғиәтенең эшен ҙурлау, баһалау тип ҡабул иттем.

**Рәйлә Имелбаева:** Беҙҙең Ҡырым башҡорттары араһында шул хәтлем туғанлыҡ тойғоһо көслө, хатта саҡ ҡына телефондан һөйләшмәй торһаҡ та ҡыйын була башлай. Бер әсәйҙең балалары һымаҡбыҙ. Юҡҡа ғына халыҡта, өйҙә булһа ҡағындыра, ситкә сыҡһа һағындыра, тимәйҙәрҙер. Ситтә генә милләтеңдең ҡәҙере нығыраҡ беленәләр инде ул. Ситтә ауылыңдың эте лә яҡын, тиҙәр бит.

**▸ Матур итеп башҡортса һөйләшәһегеҙ, балаларығыҙ башҡортса беләме, һөйләшәме?**

**Даларис Имелбаев:** Беҙ үҙебеҙ Күгәрсен районының Йомағужа мәктәбен тамамланыҡ, башҡортса уҡыныҡ. Уҡытыусыларыбыҙ уҫал, әммә ғәҙел булды, төплө белем бирҙеләр. Шуға уларға һаман да рәхмәтлемен. Әйтергә кәрәк, уҡыған ваҡытта башҡорт телен белгән кеүекһең, ә шиғыр яҙа башлаһаң, унда һәр бер һүҙҙең мәғәнәһен дөрөҫ итеп ҡулланырға тейешһең, ул рифмаға ла тап килергә тейеш. Шуға күрә мин башҡорт теле дәреслеген ҡулдан төшөрмәйем, уны әллә нисә тапҡыр уҡып сығып, ятлап бөттөм.

**Рәйлә Имелбаева:** Әнисә, Әлфиә, Гөлгөнә исемле ҡыҙҙар үҫтерҙек. Улар барыһы ла башҡортса белә, һөйләшә. Элегерәк йыш ҡайтып йөрөү мөмкинлеге булманы. Шуға ла ҡыҙҙарыбыҙға башҡорт кейәүҙәре табыу мөмкинлеге сикле булды. Кейәүебеҙ сит милләттән булһа ла, икенсе ейәнебеҙ тыуғас, "Мин һеҙгә сюрприз яһайым", тип, улына Сәйет тип исем ҡуштырҙы. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарыбыҙ ҙа: "Һеҙ балалар менән үҙ телегеҙҙә һөйләшергә тейешһегеҙ", - тип тора. Ейәндәребеҙ олатай, өләсәй, тип мөрәжәғәт итәләр, телде өйрәнергә тырышалар.

**▸ Рух, дәрт, илһам сығанағығыҙ ҡайҙан?**

**Даларис Имелбаев:** Башҡортостанға ҡайтып, Түбәташҡа менеп, тирә-яҡты күҙәтеп ултырам. Ата-бабаларыбыҙҙың тарихы хаҡында уйлайым, ябай ғына ауыл кешеләре булып та, беҙгә тура, дөрөҫ юл күрһәткәндәренә рәхмәтлемен. Әсәйем 33 йыл һауынсы булып эшләне, хеҙмәте төрлө миҙалдар менән баһаланды, олатайымдың Почет билдәһе ордены бар ине. Былдай әүҙемлек юҡтан ғына килеп сыҡмай, ата-бабалар беҙгә тере өлгө булды.

**Рәйлә Имелбаева:** Илһам сығанағыбыҙ ҙа, рухыбыҙ ҙа - Башҡортостаныбыҙ. Йыш ҡына борсолоуҙарыбыҙ ҙа тыуған яҡ менән бәйле. Республикабыҙҙағы хәлдәрҙе ошонда йәшәгән халыҡ кеүек үк, йә шатланып, йә борсолоп ҡабул итәбеҙ. Бына әле был килгәндә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ултырышында ҡатнашып, илдең төрлө төбәктәренән йыйылған милләттәштәр менән аралашып, Салауат йыйыны тамашаһын да күреп, һоҡланып, бөтмәҫ йәшәү көсө алып ҡайтып китәбеҙ. Бер бәләкәй генә борсолоуым да бар. Ғәҙәтебеҙсә, Мәләүездә лә, Өфөлә лә китап магазиндарына индек. Башҡорт телендәге китаптар кәштәләрҙә бөтөнләй юҡ тиерлек, һатыусылар әйтеүенсә, башҡорт әҙәбиәтен уҡыусы юҡ, имеш. Ышанмаҫым был һүҙҙәргә. Әммә күңелдә төйөр һәм... һорау ҡалды: "Ниңә Өфөлә генә, бер урында ғына һатыла башҡорт китаптары? Ниңә улар Мәләүездә, башҡа ҡалаларҙа, районда ҙа юҡ?"

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Яҙмыш ҡушыуы буйынса ғүмерҙәрен ситтә уҙғарған милләттәштәр менән әңгәмәләшкәндән һуң, башҡа шундай фекер килде: башҡорт булыуҙы ауырлыҡ тип түгел, мәртәбә тип ҡабул итеү, ҡайҙа ғына йәшәүенә ҡарамаҫтан, ошо атаманы бренд кимәленә күтәреүгә үҙ өлөшөңдө индереү әллә ни ауыр ҙа түгел икән. Аҡыллыға бик матур ишара был.**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ
әңгәмә ҡорҙо.

ХАҠЛЫҠ БАР ҺЫМАҠ...

# ЯУАПЛЫЛЫҠ БУЛМАҒАС...

## ярлылыҡ сигендә ҡалаһың инде

**Байҙар һәм ярлылар - бөгөнгө Рәсәйҙә был актуаль темаларҙың береһе. Байҙар менән хәл әҙме-күпме аңлашылһа, ярлылар рәтенә тәғәйен генә кемде индерергә һуң? Ярлылыҡ күберәк ир-ат иңенә төшкән кәмселекме әллә ундай "бәхет" ҡатын-ҡыҙға йышыраҡ йылмаямы? Был ике ҡатлам, матди байлыҡтан тыш, нимәһе менән айырыла? Ошо һәм ярлылыҡҡа ҡағылған башҡа һорауҙарға Рәсәй Фәндәр академияһы уҙғарған тикшереүҙәр яуап бирә. Күҙ һалып үтәйек.**

**Рәсәй ярлылығының "йөҙө" - ҡатын-ҡыҙ.** Килем буйынса ҡарағанда, ярлыларҙың өстән ике өлөшө - ҡатын-ҡыҙҙар. Һуңғы йылдарҙа был айырма айырыуса күҙгә ташлана. Мәҫәлән, 2003 йылда ярлы ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар араһында нисбәт бер кимәлдә тиерлек булһа (46-47 процент), 2008 йылға иһә был һандар, ярашлы рәүештә, 33 һәм 39 процент тәшкил иткән. Ә бөгөнгө көндә улар араһындағы айырма тағы ла ҙурыраҡ.

**Ярлылыҡ - маҡтаныуға сәбәпме?** Әгәр ҙә элегерәк йәмғиәттә үҙҙәренең ярлы ғаиләнән сығыуы хаҡында ғорурлыҡ менән үк булмаһа ла, "уның ҡарауы, ғәҙел йәшәйем", тип һыҙыҡ өҫтөнә алыу күренеше йыш күҙәтелһә, хәҙер фәҡирлектә йәшәү дәрәжәле һаналмай. Йәмғиәт кешенең алдашыуһыҙ, урлашыуһыҙ, йәғни легаль юл менән дә етерлек кимәлдә аҡса эшләй алыуын таныны. Улай ғына ла түгел, етеш йәшәүгә, байығырға ынтылмаған кешегә бөгөн аптырап ҡарайҙар. Рәсәйҙәрҙең 30 проценты, кешенең ярлы йәшәүендә ул үҙе ғәйепле, тип һанай.

**Кредиттар - ярлылар өсөн.** Халыҡтың ярлы ҡатламы үҙҙәрен кәм һанай һәм үҙ хәленән ояла. Шуға күрә уларҙың күбеһе башҡаларҙыҡы кеүек үк ҡыйбатлы телефонлы, машиналы, кейемле булыу өсөн кредит ала. Ғәҙәттә, бер кредитын ҡаплау йәки тағы ла ниндәйҙер әйбер алыу өсөн ул икенсеһен, өсөнсөһөн һәм артабанғыларын ала. Шулай итеп, бурыстар соҡорона эләгеүен үҙе лә һиҙмәй ҡала.

**Кире ҡайтмау нөктәһе.** Күпселек рәсәйҙәр, ярлылыҡҡа юл бик ҡыҫҡа булыуы мөмкин, тип һанай. Ә бына кирегә юл оҙаҡҡа һуҙылыуы һәм бик ауырға төшөүе ихтимал. Ваҡыт уҙған һайын, кеше ярлылыҡ һаҙлығына нығыраҡ бата. Социологтар билдәләүенсә, Рәсәй халҡының ярлылығында ниндәйҙер кире ҡайта алмау нөктәһе бар. Шул сикте үткән кеше һәйбәт киләсәккә ышанысын юғалта һәм ярлылыҡтан сығыуға өмөтөн өҙә. Ул уртаса 3 йыл арауыҡты үҙ эсенә ала.

**Ярлылыҡтан ҡурҡыу - ғаилә бәйләнештәрен нығыта.** Күптәр ғаиләле булыуҙы ярлылыҡтан һаҡланыуҙың бер гарантияһы итеп күрә. Матди хәленең насарайыуынан ҡурҡыуҙан ғына ғаиләләрен һаҡлап ҡалыусылар бихисап. Ғаиләләрендәге мөнәсәбәттәрҙең яҡшы булыуын ни бары 44 процент Рәсәй кешеһе билдәләй. Ә байҙар араһында был һан 69 процентҡа тиң.

**Берәү ҡарамағына - өс кеше.** Бала тыуыуы күп ғаиләләрҙә йәшәү кимәле түбәнәйеүенә алып килә. Шулай уҡ ғаиләлә эшләмәүсе башҡа ағзаның - ҡарт кеше, ғәрип, ауырыу һәм башҡаларҙың булыуы ла ошо уҡ хәлгә килтерә. Социологтар сығарған формулаға ярашлы, ғаиләләге бер хеҙмәт итеүсегә өстән артыҡ эшләмәүсе тура килһә, ул ғаиләнең ярлылар иҫәбенә эләгеү мөмкинлеге өс тапҡырға арта.

**Ярлылыҡты һайлап буламы?** Ун йыл элек насар тәьмин ителеүселәр араһында үҙенең проблемаларын ваҡытлыса күреүсе һәм хәле оҙаҡламай яҡшырасаҡ, тип иҫәпләүселәр күп булған. Ә һуңғы йылдарҙа иһә үҙенең ярлылыҡтың иң төбөндә булыуы һәм унан сыға алмаясағы хаҡында белдереүселәр бермә-бер артҡан. Әлеге ваҡытта ярлыларҙың 71 проценты үҙҙәрен йәмғиәттең "түбәнге ҡатламы"на индерә, ә 23 проценты - ярлылыҡтың иң төбөндә булыуҙарын белдерә.

**Яуаплылыҡ юҡ, тимәк, аҡса ла юҡ.** Ярлыларҙың 71 проценты йәмғиәттәге тигеҙһеҙлекте бөтөрөү дәүләт иңендә, тип иҫәпләй. Улар, ғөмүмән, үҙҙәренең бәхетһеҙлектәрен башҡалар иңенә япһарырға, ә байҙарҙы йылғырлыҡта һәм намыҫһыҙлыҡта ғәйепләргә әүәҫтәр. Ә байҙар, үҙ сиратында, уларҙы ялҡаулыҡта һәм башҡалар ҡарамағында йәшәргә ынтылыуҙа ғәйепләй.

**Үҙгәртеүҙәргә түгел, тотороҡлоҡҡа ынтылыш.** Ярлылыҡ сигендә тороусы рәсәйҙәр үҙҙәренең тормошонда нимәнелер үҙгәртергә тырышмай. Айырыуса был аҙымға үҙ көстәре менән ынтылыусылар һирәк. Ярлылар өсөн үҙгәрештәр түгел, ә тотороҡлолоҡ мөһимерәк. Уларҙың күбеһе һәйбәт тормошҡа ышаныстарын ғәмәлдәге хөкүмәт менән бәйләй.

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА
әҙерләне.




Әмәлгә ҡалғандай, Вәлинурҙың: "Әхмүш килә, әйҙәгеҙ!" - тигән һөрәне ишетелде. Бәхтегәрәй ҙә, буш ҡалмағайым, тип, шул яҡҡа сапты.

- Был мөртәттәр байуҡ Әхмәҙулланан көмөшкә таптыра ине. Бәхтей ҡәберҙе ҡаҙҙырмау менән дә янаған шикелле, - тип, хәлгә асыҡлыҡ индерҙе Тимерхан. - Һәр хәлдә, уға ҡарап, ер өҫтөндә мәйет ҡалдырмаҫ инек тә ул...

Төрмәнән башы сыҡмаған, хилафлыҡ ҡылыр өсөн генә яралған Бәхтегәрәйҙән ир-аттың шөрләңкерәгәнен аңғарғайны ҡарт. Икмәк шүрлегенә менергә күп һорамаҫ Бәхтегәрәйҙәр менән кемдең бысранғыһы килһен. Ғауға сығырға сәбәпсе булған баш һөйәген ҡулына алған Тимерхан: "Бына ғәләмәт, был баш һөйәге нисек көньяҡҡа барып ятты икән?" - тип аптыраны. Тел араһынан арына алмай торған Йәгәфәр ҡарттың йәне көйҙө.

- Ярты быуат йәшәгәнһең, кем, Тимерхан, шуны ла төшөнмәйһең. Ауыл буймы, арҡырымы?

- Буй-буй, - тиеште ирҙәр.

- Зыярат та буй. Шуның өсөн ҡәберҙе лә буйына ҡаҙабыҙ. Мәрхүмдең кәүҙәһе көньяҡтамы, төньяҡтамы - уныһы мөһим түгел. Бары башты ҡиблаға дөрөҫ итеп бороп һалыу кәрәк. Бынан ары мәрхүмдең йөҙөн Туҡалтау тәңгәленә борһағыҙ - ана шул булыр беҙҙең ҡибла.

- Бына хикмәт!

- Әтнәкәһе шунда булған икән.

Кескәй балалар һымаҡ шаулашҡан ир-атҡа ризаһыҙ ғына ҡарашын төбәп: "Араҡы менән мейеһе шыйыҡланып бөткән теге дәжжәл хаҡлы. Йәштәргә тәғәйен бер нәмә лә өйрәтмәйбеҙ, һәр кем үҙе өсөн генә мулла. Музей экспонаты һымаҡ, мәңгелеккә килгәндәй йәшәйбеҙ. Ололар - йәштәрҙе, йәштәр ололарҙы аңламай", - тине ҡартлас һыҡранып.

* * *

Зәһиҙулланың йыназаһын буйраҡ ҡына хәтерләй Йәгәфәр ҡарт. Күңеле түренән иң ҡәҙерле әйбере һурылып юғалғандай, хәтһеҙ көндәр кәйефһеҙ йәшәне. Тышҡа сыҡһа, ҡоймаһы аша үрелеп, ҡараштары менән күршеһен эҙләне. Ана-бына Зәһиҙулла килеп инер, тип көттө.

Нужа баҫҡан, тиер инең, етеш йәшәне. Өйөндә лә татыулыҡтың сиге булмай торғайны. Зәһиҙулланың ҡара йәшенән йөрәк өйәнәге менән яфаланғанын белмәй ине бабай. Шуға ла яҡын күргән кешеһенең диванға терәлгән килеш үлеп ултырғанын ҡабул итә алманы. Уның үҙ туҡһаны туҡһан.

Һы, нужа, имеш. Улайға китһә, Йәгәфәргә лә ул нужа әсе һурпаһын аҙ һөрпөлдәтмәне. Яҙмышы тормошон сәрпәкләтеп ҡайҙарға ғына бырағытманы. Һынманы, бөгөлмәне, бар хәселен һалып сәмләшеп йәшәне. Өс йәшендә генә үкһеҙ етем булып, апайҙары ҡулына ҡалды. Ҡалды, имеш. Әйтеүе генә анһат, апай тигәндәренең береһенә биш, икенсеһенә һигеҙ йәш булғандыр. Үҙҙәре бәндә көнлө. Етем ҡорһағы ете ҡат, тигәндәй, кем саҡырһа, шунда туҡландылар.

Илдә сыпсыҡ, ысынлап та, үлмәй икән. Йәгәфәрҙе күрше Ғәфүрә әбей бауыры аҫтына баҫты. Ауылды ташлап, ҡырға сығып китеүенә лә шул инәһе сәбәпсе булды.

Йәгәфәрҙең ун бишенсе йәшен тултырған йәй уртаһы ине. Ихатала балта һабы сабып торған үсмер малай-шалайҙың сыр-сыулап йүгергәнен, эттәр лауҡылдағанын ишетеп, ҡойма аша һоноллдо. Урамдан һыу буйындай һуҙылған ылауҙар үтеп бара ине.

- Әллә утыҙ, әллә ҡырҡ, шутына ла сығалмаҫһың, - тип ҡарһаланып, Ғәфүрә инәй өйҙән сыҡты. Йәгәфәр ҙә йән-фарман ылауҙар туҡтаған ергә - мөгәзәй ҡырына сапты. Ылаусылар араһында күрше ауылдарҙан да, Иҙел һыулап ятҡан ауылдарҙан да таныш кешеләр байтаҡ күренә.

Шул арала Ғәфүрә әбей ҙә килеп етеп, танышын табып, һөйләшеп тә тора.

Юлаусылар оҙаҡ тотҡарланманы, кис һарҡыуға, поезд ҡуҙғала, тип, бер-бер артлы аттарының янбаштарына ҡаҡтылар. Тимер юл станцияһы Йәгәфәрҙең ауылынан хәтһеҙ генә саҡрым ята шул.

- Йөрөшләтеп кенә барһағыҙ, аттарығыҙ бирешмәҫ. Бүртәләрегеҙ ҡарамаҡҡа былай сыҙам ғына күренә, - тип ҡысҡырып ҡалды юлаусыларға Данияр ҡарт.

- Эй, Алла! Анау өсөнсө арбаны тартҡан малайҙың кикелен киҫһәләр, ни була инде, - тине өҫтәп.

Кемдер Йәгәфәрҙең бөйөрөнә төрттө. Ғәфүрә инәйе икән.

- Улым! Бында һине нимә көтә? Мин бөгөн бар, иртәгә - юҡ. Кемгә морон төртөрһөң? Апайҙарыңдың һинән башҡа ла ҡашыҡ тотоусылары бихисап. Эйәр ҙә кит былар менән туҡ яҡҡа, - тип, ылаусылар яғына ҡул иҙәне. "Туҡ яҡ" һүҙен ишетеүгә Йәгәфәрҙең күҙ алдына ашъяулыҡта өйөлөп ятҡан әпәкәйҙәр килде. Аяҡтары үҙҙәренән-үҙҙәре сәфәр сығыусылар артынан атланы.

- Бар-бар, балам, йүгер, хәҙер тороп ҡалаһың. Бәхил бул! Бынан ахыры күрә алмам инде, - тине Ғәфүрә инәй боһанып.

Үҙ ҡанаты аҫтына алған, әсәһе кеүек яҡын күргән әбейҙән айырылыуы ҡыйын ине үсмергә. Ғәфүрә ҡарсыҡтың күҙ йәштәрен күреү күңелен йомшартты, китеү уйынан кире һүргәндәй булды.

- Инәкәй! - Йән асыуы менән ҡысҡырҙы Йәгәфәр. Түҙмәне, инәһенә ҡаршы китте. Ләкин Ғәфүрә ҡарсыҡ малайҙы ҡулынан эләктерә һалып, арбалар артынан өҫтөрәне. Иң һуңғы ылауға этеп тигәндәй ултыртып ебәрҙе.

- Мостафа! Минең малайҙы күҙ уңынан ысҡындырма. Башкөллөһө менән һиңә тапшырам, - тип тәбәнәк буйлы кешегә һөрәнләне. Ә үҙе яулыҡ осон иренenә ҡымтып, йәшкәҙәгән күҙҙәрен улына күрһәтмәҫкә итепме, бер тултырып ҡараны ла, кинәт кенә ауыл яғына боролдо. Инәйен күҙҙән юғалғансы ҡараны Йәгәфәр. Күҙҙәрендә ниндәйҙер өмөт саҡтылары ялралды. Хәҙер-хәҙер аҡ яулығын елберҙәтеп, йәшел камзуллы инәкәйе "Ҡуй, улым, мине ташлап китмә", тип, йүгереп кире артынан килер төҫлө ине.

Ғәфүрә әбей күренмәне. Аңынтоңон белештермәйенсә, йыраҡ, билдәһеҙ тарафтарға ҡапылғара юлланыуына үкенеп тә ҡуйғандай үсмер. Ҡулында, исмаһам, төйөнсөгө лә юҡ. Хәйер, булыу менәнме, төйөнсөккә һалыр ризығың, төйнәр кейемең булмағас. "Ят бауырҙарға үҙенең балаһын тағып ебәрмәҫ ине әле", тип, күңеленән Ғәфүрә ҡарсыҡҡа үпкәләп тә алды. Дегете йыуылған арба тәгәрмәстәре лә малайға "Бирешмә, бирешмә!" тип шығырлағандай тойолдо. "Бирешмәҫкә!" Йәгәфәр тамағы төбөндә ҡатып ҡалған төйөрҙө йотто ла башын күтәрҙе.

* * *

"Хоҙай Тәғәлә әҙәм иңе күтәрә алмаҫтай һынауҙарҙы бирмәй ул", тип ҡабатларға ярата бит Ғәфүрә инәйе лә. Ниһайәт, Йәгәфәр үҙе ултырып китеп барған арбалағы кешеләргә күҙ йүгертеп сыҡты. Арҡаға-арҡа терәгәндәй ултырған ҡыҙ ялп иттереп әйләнде лә, ҡара күҙҙәрен тултырып, егеткә ҡарап йылмайҙы. Йәгәфәрҙең арҡа буйынан ниндәйҙер һалҡын тулҡындар йүгереп үткәндәй булды. Тормош бит - хәсрәте лә, шатлығы ла, игеҙәк балалай, йәнәш йөрөй. Әле генә тыуған ауылын, туғандарын, Ғәфүрә инәкәйен юғалтып, үҙен үкһеҙ етем итеп тойоп килгән Йәгәфәрҙең күңелендә үҙе төшөнә алмаҫлыҡ йылы хистәр ялралды. Йөрәге ярһып дөпөлдәне.

Поезд һикеһендә лә йәнәш килде урындары. Ғәфүрә инәкәйе тигенгә Мостафаға тағып ебәрмәгәндер, был ғаиләнән бүтәнсә айырылманы Йәгәфәр, киреһенсә, уларҙың ғаилә ағзаһы булып китте. Ғәфүрә ҡарсыҡтың "туҡ яҡ" тигәне Үзбәкстан булып сыҡты. Йәгәфәр күҙ төбәп барған ер ҙур ғына совхоз ине. Ыстанда аш бешереүсе булып эшләгән Катерина исемле мәрйә ике үсмерҙе - Йәгәфәр менән Алексей тигән малайҙы үҙенә фатирға төшөрҙө. Башта үсмерҙәр төрлө эштәрҙә йөрөһәләр ҙә, эшкә әрһеҙлектәрен, һерелектәрен күреп, икәүһен дә механизаторҙар курсында уҡытып алдылар. Торабара Йәгәфәргә мамыҡ йыйыу комбайнын да ышанып тапшырҙылар.

Ҡәһәрле һуғыш башланғандың көҙөнә икеһен дә хәрби хеҙмәткә саҡырҙылар. "Н" станцияһында уҡ икеһе ике тарафҡа юлланды. Ҡаты алыштарҙа Алексейҙың батырҙарса һәләк булғанын ишетеп, иңрәп ҡайғырыуын күҙ алдына ла килтерә алмай ине Йәгәфәр.

Яҙмышына рәхмәтле булды егет. Баштан аҙағына тиклем һуғыш ғәрәсәттәрен кисеп, алты һаны ла һауһаҡ Йәгәфәр, оҙаҡ уйлап торманы, тура үзбәк иленә юл тотто. Үҙе менән бер арбаға тәл килгән Йәнбикәһе менән мәңгелеккә бергә ҡалырға ниәте.

Мостафа ҡыҙына ҙурлап туй үткәрҙе. Ҡыҙыҡ үтте туй мәжлесе. Кемдәр генә булманы унда: үзбәге лә, башҡорттары ла, сыуашы ла...

Ҡатын бәхете менән йәшәне Йәгәфәр. Бер яратты, берәгәй яратты. Бер-береһенә ҡабаған һүҙ әйтмәнеләр. Тормоштарының бер генә яғы китек булды. Йәнбикә йөккә уҙманы. Ғүмер үткән һайын тыуған яҡтар йән әрнетеп иҫкә төштө. Йөмһүриәттәр үҙ-ара айырым ил булырға ҡырталашҡан осорҙа башҡорт иленә бөтөнләйгә ҡайттылар...

* * *

Инде нисәнсе көн рәтле йоҡо күргәне юҡ Йәгәфәр ҡарт. Йоҡо тип әйтерең бармы, ҡош кеүек төнәп ала ла.

Ҡиәмәт һандығының да урынын һыуытманы. Көн һайын тартып сығара ла, бөтә әйберенең етеш, таҫлап һалынғанын белһә лә, йыбанмай яңынан барлай. "Дүртмөйөшкә" тәғәйен йөҙәр һумлыҡтар ҡулъяулыҡтарға төрөлгән, Ҡөрьән сыҡҡан муллаға мең һумлыҡты конвертҡа яҙып һалған, гүр хәйеренә тигән тояҡлы мал Мәхмүзә килендең кәртәһендә, ҡәбер ҡаҙыусыларға ла етерлек аҡса бүленгән. Ваҡ тинлектәр ҙә үҙ мөҙҙәтен көтә.

Һуңғы көндәрҙә ҡиәмәт һандығына мулла исеменә аҡ ҡағыҙ киҫәге лә инеп ятты. Унда үҙен ерләгәндә араҡы тигән хәрәмдең әруахтар йортона индерелмәүен үтенеп яҙғайны. Эйе, бөтәһе лә әҙер, теүәл, тик әжәл тигәне генә күренмәй. Күҙе тонған ғазраил бабай йәндәй күргән яҡындарын һарауһыҙ ала ла китә бит. Йәненең әрнеп һыҙлауҙарын баҫалмай, сәғәттәр буйы урындыҡта аунап ятҡан саҡтары ла булды. Нишләйһең, түҙергә тура килә.

Бер көндө хәсрәттәрен яңыртып, ҡиәмәт һандығын таланылар. Эйе, көпә-көндөҙ, Зәһиҙулла мәрхүмдең йәне ерҙән айырылып күккә осҡан көн ине. Мәхмүзә килененең йортона мәрхүм рухына аят уҡып сыҡҡан арала ғына йоҙаҡ-ниҙе ватмай-емермәй генә солан иҙәненең таҡтаһын шылдырып, тауыш-тынһыҙ ғына өйгә үткәндәр, мөртәттәр. Бөтөн аҡса, байтаҡ ҡына әйберҙәре лә аяҡланғайны.

Бүтән ерҙә лә әйбер етерлек ине бит. Матрас аҫтында аҡсаһы ла ята ине. Ҡиәмәт һандығына көндәре төшмәһә. Күңеленән ауыл кешеләрен барланы. Кинәт кенә Бәхтегәрәй иҫенә төштө. Шул мөрәүәтһеҙҙең этлеге булһа кәрәк.

Килер ҡаза шуның менән бөтһөн, яңынан барлар әле, тип, үҙен йыуатты Йәгәфәр ҡарт. Әхирәт монаяттары таланыуҙың өсөнсө көнө булһа кәрәк, төнгө өҫтәр тирәһендә шипкерт кенә тәҙрә ҡаҡтылар. Ҡартты өркөтөп ҡуймайым, тигәндәй, Тимерхан үҙенең кемлеген белгертә һалды. Төнгө йомошсо өйгә үтте.

- Йәгәфәр апа, теге ней бит әле, Бәхтегәрәй китеп барған.

- Ҡайҙа киткән?

- Эңерҙә Нәсибәнән сыҡҡанын күргәндәр. Ҡулында баллоны ла булған.

- Уныһы нимә тағы?

- Бер шешә спирт апсыҡҡан. Вәлинуры әйтә, ике рүмкәһе әйбәт кенә барҙы, ти. Өсөнсөһөн эсәм тигәндә ауыҙ-ҡолағынан ҡан борхолданы, ти. Иҙәнгә ҡолаған да, хырылдап, шунда уҡ йән биргән.

- Милитсийәгә әйтергә кәрәк. Мин адуакатмы әллә һиңә?

Йәгәфәр бабайҙың һаман да Бәхтегәрәйҙең ҡылыҡтарын онотмауы һиҙелеп тора ине.

- Ул көмөшкә һатҡан бисәләрҙе милиция түгел, аждаһа ла еңә алмаҫ. Аяҡтарынан аҫып ҡуйып ҡына алдарына сыҡмаһаң. Инде нисәмә кешенең башына еттеләр, фашистар, - тине йәне үртәлеп Тимерхан. -Һиңә тәңгәлләп килеүем шул - иртәгә мәрхүмде арыулап ерләргә ине. Мөртәт булһа ла, үҙ кеше бит. Байгилде мулла барыуҙан баш тартты.

- Көтөргә кеше бармы һуң?

- Шешәләштәре инә-сыға йөрөй. Төн йөҙөн йыртып унда барып тормайым мин дә.

- Унда бармағас, ни бысағыма мине бимазалап йөрөйһөң? - Йәгәфәр ҡарт элеүле торған салбарына үрелде.

Бабай Бәхтегәрәйҙең тупһаһында күренеү менән Вәлинур башын эйеп сығып тайҙы. Тиҫбе тартҡан ыңғайҙа зыяратта йән асыуынан Бәхтегәрәйгә ысҡындырған һүҙҙәре бабайҙың эсен тырнаны, йөрәген өйкәне. "Асыу - алдан, аҡыл - арттан. Эй, Хоҙайым, ҡарт иҫәрҙе кисерһәңсе, ярлыҡасы фәҡиреңде, эй, абыйым!" - тип шыбырланы ирендәре.

Еренә еткереп арыулатты Бәхтегәрәйҙе Йәгәфәр ҡарт. Ҡиәмәт һандығынан ҡалған әйберҙәрен алдыртып, хәйер итеп таратырҙы.

Шешенеп-буҙарынып йөрөгән шешәләштәре тауыш-тынһыҙ ғына хәйерлеккә эләккән биш тәңкәлектәрҙе устарына йомдо ла, зыяраттан һыҙыу яғын ҡараны. Ә айырылмаҫ дуҫы булып һаналған Вәлинур Йәгәфәр бабайҙан кисереү һорағандай, ҡулын күкрәк тәңгәленә ҡуйып, башын эйеп сығып китте.

- Иҡсанбай, мәрхүмдең башын ҡиблаға бороңҡора, - тине Йәгәфәр ҡарт.

Бер аҙҙан ул бәүелеп кенә ауыл яғына ыңғайланы.

**(Аҙағы. Башы 42-се һанда).**

ХӘТЕРКИТАП

**Беҙ, Учалы районының Өргөн ауылы халҡы, Мостафа Сафа улын күреп беләбеҙ. Уны хатта иң хөрмәтле ауылдашыбыҙ һымаҡ ҡабул итәбеҙ. Мостай ағай Бөйөк Ватан һуғышынан яраланып ҡайтҡас, дуҫы, яугир-яҙыусы, беҙҙең ауылдашыбыҙ Мөхәмәт Хәйҙәров эргәһенә ғаиләһе менән килеп йөрөнө. Күренекле әҙип үҙенең ябайлығы, ихласлығы, киң күңеллелеге менән һәр саҡ һоҡландырҙы ауылдаштарымды.**

# ИЖАД ДОНЪЯҺЫНЫҢ...

## оҫта кәбәнсеһе булды



Оло быуын кешеләре һөйләүенсә, Мостай Кәрим Өргөн, Ҡалҡан күлдәре буйында ял итергә яратҡан, хуш еҫ бөрккән ҡарағас, ҡарағай ағастары менән ҡапланған гүзәл тәбиғәтле Олотау, Оҙонғор тауҙарының башына менеп, тирә-яҡҡа һоҡланған. Ошо бәрәкәтле ерҙә илһамланып, күптәргә билдәле "Өс таған" повесын яҙған. Үҙенең геройҙары итеп яҙыусы беҙҙең ауыл кешеләренең яҙмышын һүрәтләгән.

**Өргөн ауылында йәшәүсе Мөнирә Закирова инәй һөйләгәндәрҙән:** "Мостай Кәримдең ғаиләһе менән Өргөнгә ял итергә 1950, 1952, 1953 йылдарҙа килгәнен хәтерләйем. Беҙ яҙыусы Мөхәмәт Хәйҙәров ағайҙарға күрше генә йәшәнек. Бер саҡ уларҙа үҙ ғаиләһе менән Арыҫлан Мөбәрәков ял итә ине, шул мәлдә Өфөнән ғаиләһе менән Мостай Кәрим дә килеп төштө. Тегендә урын ҡыҫынҡыраҡ булғандыр инде, Мостай ағай беҙҙә туҡтаны.

Бер йәй улар Мәскәүҙән тулы ғына кәүҙәле бер ҡатынды ла алып килделәр. Ул яраланып, һуштан яҙған Мостафа ағайҙы һуғыш яланынан алып сыҡҡан, үлемдән ҡотҡарған санитарка булып сыҡты. Мостафа ағай уны хөрмәт йөҙөнән ҡунаҡҡа саҡырып, беҙҙең гүзәл яҡтарҙы күрһәтергә булған. Күмәкләп, бортлы машинаға тейәлеп, Ирәмәл тауына походҡа барып ҡайттылар. Мостафа ағай миңә үҙенең рус һәм башҡорт телдәрендә сыҡҡан "Беҙҙең өйҙәң йәме" исемле китаптарын бүләк итте. Ул урамда үҙе менән һөйләшеп торған ирҙәргә күстәнәс итеп "Казбек" папиросын таратыр ине. "Кешеләр менән һөйләшеү - үҙе бер тарих, улар күңелемдә төрлө образдар, ваҡиғалар тыуҙырып, уй-зиһенемде байыта", - тиер ине. Яҙған әҫәрҙәрен "Нисек, килешәме?" - тип ҡатыны Рауҙа апайға уҡып ишеттерер ине. Күмәкләп емеш-еләк йыйырға йөрөнөләр. Тик Илгиз улдары ғына урманға бармай, йәшенеп ҡала торғайны. Йылғаға барып, һыу төшөп килә лә, йотлоғоп китап уҡый. Инәйем, был бала уҡымышлы булыр, тип шаяртыр ине. Илгиз ауыл малайҙары менән дә дуҫлашып бөттө. Бына шулай, күрше булғас, Мөхәмәт Хәйҙәров ағайҙар, уның Өфөләге дуҫтары менән аралашып йәшәнек..."

**Нәжибә инәй Вәлиева һөйләгәндәрҙән:** "Талха бабайыңа кейәүгә сыҡҡас, беҙ Мөхәмәт ағайҙар менән аралаша башланыҡ. Бер саҡ Талха үҙенең Нияз ҡустыны менән бура бурай ине, күл буйынан Мөхәмәт ағай менән Мостай Кәрим килеп сыҡты ла, беҙгә хәл белешергә керҙеләр. Ул саҡта ризыҡ яғы наҡыҫ ине. Ярай әле, таба йөймәһе бешергәйнем. Бөтәһен дә ҡорға саҡырып, яңы ғына һауылған һыйыр һөтө ҡойоп бирҙем. "Сәй-шәкәр юҡ инде, ғәйепкә алмағыҙ, зинһар", - тим үҙем уңайһыҙланып ҡына. Улар: "Туғаным, беҙҙең өсөн ошо йөймә менән һөттән дә тәмле нәмә юҡ, аштан оло булмайыҡ", - тип, табынға ултырҙылар. Дөртәүләп һөт эсеп, бик оҙаҡ һөйләшеп ултырҙылар..."

Мостай Кәримгә 85 йәш тулғанда, мин халыҡ шағирына арнап, ошо шиғырҙы яҙғайным. Был шиғыр 2004 йылда "Йәшлек" гәзитенең 14 октябрендә баҫылып сыҡты.

### Башҡортостан халыҡ шағиры Мостай Кәримгә

*Күптәр тормош кәбәндәрен*
*Килештереп ослай алмай.*
*Һеҙ яҙғандар - ҡупшы кәбән,*
*Шундай мәғрур, Мостай ағай!*
*Ҡоштар бик күп. Тик күптәре*
*Юғарынан оса алмай.*
*Һеҙ яулаған бейеклектәр*
*Насип булһын беҙгә, ағай!*
*Бар донъяны моңға күмеп,*
*Һайрайһығыҙ һандуғастай.*
*Ер шарының һандуғасы*
*Ул - һеҙ икән, Мостай ағай!*
*Күптәр тормош кәбәндәрен*
*Килештереп ослай алмай.*
*...Беҙгә кәбән ҡойошорға*
*Өмәгә кил, Мостай ағай!*

Күп тә үтмәй, Мостафа ағайҙан йылы ғына итеп яҙылған хат алдым. "Шиғырығыҙ миңә ныҡ оҡшаны. Тура килгәндә, мин һеҙҙең яҙғандарығыҙҙы уҡыштыра барам. Хәтерҙә ҡала улар. Өмәгә сығырға ҡаршылығым юҡ, Рамай, әммә һин үҙ кәбәнеңде матур ҡояһың. Шулай дауам ит!" - тип яҙғайны Мостай Кәрим.

Ижад донъяһының оҫта кәбәнсеһе, киң күңелле өмәсеһе булды Мостай ағай. Ул тормошҡа һоҡланып һәм башҡаларҙы һоҡландырып йәшәне, үҙенең һуңғы көндәренә тиклем кешеләргә ҡулынан килгән ярҙамды күрһәтте. Кемгәләр тәүге китабын сығарышты, кемгәләр йәшәү өсөн фатир алыу мәсьәләһен хәл итеште, кемгәләр үҙенең йылы һүҙҙәре, аҡыллы кәңәштәре менән ижади дәрт, йәм өҫтәне. Миҫал итеп шуны әйтә алам: 2005 йылда беҙҙе Башҡортостан Яҙыусылар Союзына ҡабул иткәндә, дауаханала ятыу сәбәпле, осрашыуға үҙе килә алмаһа ла, идара исеменә хат яҙып ебәргәйне. Шул кеҫкәй генә хат минең алдағы яҙмышыма ыңғай йоғонто яһаны. Мостафа Сафа улына бик рәхмәтлемен, ғүмергә бурыслымын .

**Рамай ҠАҺИР,**
**БР һәм РФ Яҙыусылар союзы ағзаһы.**
**Учалы районы.**

БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...

# ЙӘШӘҮ - МӘҢГЕЛЕК



**Әмир Мәзитовтың "Балыҡтар йыры. Йылғалар башы" картинаһын күреү менән ниңәләр иң тәүҙә тыныслыҡ, һиллек, бөтөнлөк, ҡәнәғәтлек, мәңгелек йәшәү, мәңгелек Ваҡыт тигән төшөнсәләр күңелгә килә.**

Ысынлап та, мәңгелек йәшәү карабы талғын ғына мәңгелек Ваҡыт һыуҙары буйлап гиҙә. Тарихи үткәнебеҙҙәге ваҡиғаларҙың шаңдауы уға эйәреп бөгөнгөлә яңғырай ҙа, бөгөнгөнән яҡты өмөттәр, ышаныстарҙы нур итеп йыйып, киләсәккә һуҙа. Кеше өсөн ғүмер күҙ асып йомған ара кеүек тойолһа ла, йәшәү - ул мәңгелек. Картинала йәшәүҙең мәңгелеген иҫбатлаусы тағы бер сара - ағас. Ныҡлы тамырлы ағас быуындарҙы бәйләүсе, ул тарихи үткәндәрҙән һут алып, ҡояшҡа ботаҡтарын һуҙа. Был ағас - беҙҙең шәжәрәбеҙ булыр.

Картинаның исемендә генә лә әллә күпме мәғәнә йәшерелгән. Йылғалар башы - ул йәшәүҙең башланғысы. Ә йәшәүҙең башы - тыныслыҡта. Бәлки, сәңгелдәктәге сабыйҙың татлы йоҡоһон һаҡлап, бөтөн донъя тын ҡалғандыр. Бала, һис шикһеҙ, кешелекте дауам итеүсе булараҡ һүрәтләнә. Шул уҡ ваҡытта ул беҙгә шуны ла иҫкәртә - ниндәй генә нанотехнологиялар дәүерендә йәшәмәйек, тәбиғәт ҡанундары, уның серҙәре алдында беҙ бер сабый ғына. Балыҡтар йыры - ниндәй тапҡыр һәм уңышлы метафора! Балыҡтар өнһеҙ. Улар башҡарған йыр - тынлыҡ. Тауыш караптағы гармонияны боҙасаҡ, шылт иткән тауышҡа ла сабый уянасаҡ.

Теҙелеп киткән тирмәләр - башҡорт халҡының асылы. Был - беҙ. Беҙҙең хистәр, беҙҙең холоҡ, беҙҙең ғорурлыҡ, беҙҙең сабырлыҡ. Карапта тирмәләр булыуы - халҡыбыҙҙың киләсәге яҡты булырына ныҡлы ышаныс.

**Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

# КӘМӘ-ЕР...

## Йыһанда йөҙә

**Әмир Мәзитовтың "Балыҡтар йыры. Йылғалар башы" һүрәтенә ҡыҫҡа ғына итеп фекеремде белдергем килә.**

Диңгеҙ - Йыһан. Балыҡтар - йондоҙҙар. Кәмә - Ер, ул Йыһанда йөҙөп йөрөй. Ағас - кешелек нәҫеле. Уның ботаҡтары - ғаилә. Ботаҡҡа эленгән берҙән-бер сәңгелдәктә ятҡан бер бөртөк бала хәҙерге заман ғаиләләрендәге хәл-торошто күрһәтеп тора кеүек. Кәмәләге тирмәләр иһә - буш өйҙәр...

**Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ.**
**Баймаҡ районы.**

**Шулай итеп, Мәҙәниәт йылына бағышланған бәйге дауам итә, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ. БР-ҙың атҡаҙанған рәссамы, Ш. Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Өфө дәүләт сәнғәт академияһы профессоры Әмир Мәзитовтың "Балыҡтар йыры. Йылғалар башы" тигән картинаһы буйынса фекерҙәрегеҙҙе көтөп ҡалабыҙ. Был донъяны һәр кеше үҙенең кәмәһендә йөҙөп үтә. Ләм, һис шикһеҙ, үҙ кәмәһен һәр кем үҙе өсөн генә ҡәҙерле булған нәмәләр менән тултыра. Һүрәттә рәссамдың кәмәһе һүрәтләнгән, тип күҙ алдына килтерһәк, ул уны үҙе һәм башҡорт халҡы өсөн мәңгелек ҡиммәттәр булып иҫәпләнгән образдар - ҡолас етмәҫлек ағас, уның ботағына эленгән сәңгелдәк һәм башҡа нәмәләр менән тулыландырған. Был һүрәт һеҙҙең күңелегеҙҙә ниндәй тойғолар уята? Һеҙ үҙ кәмәгеҙҙә нимәләр алып китеп бараһығыҙ? Һүрәт тураһында фекерҙәрегеҙҙе ирекле рәүештә (мәҡәлә, һүрәтләмә, бер кәлимә фекер, риүәйәт, нәҫер, хикәйә һ.б) беҙгә яҙып ебәрегеҙ. Конкурс эштәрен баһалағанда һүрәттең идея-тематик йөкмәткеһен, художестволы үҙенсәлеген, заман һулышын һынландырыуын ни рәүешле аса алыуығыҙға төп иғтибар йүнәлтеләсәк. Һеҙҙән хаттар көтәбеҙ!**

*✓ Бына беҙ тулҡынланып Аҡназар ауылына "Ашҡабаҡ байрамы"на йыйылдыҡ. Тулҡынланып, тинем, сөнки бындай сараны әле үткәргәндәрен ишеткән юҡ ине әле. Ауылға инеп, байрам уҙған Ишкилдиндар ихатаһына йүнәлдек.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АРЗАНЛЫ СӘЙ... зыянлыраҡ

■ Ҡайнатма тәмле ризыҡ ҡына түгел, файҙалы ла, ти белгестәр. Ҡурай еләге ҡайнатмаһы, мәҫәлән, һалҡын тейгәндә яҡшы ярҙамсы, ул юғары температураны төшөрөү һәләтенә эйә. Унын составындағы махсус кислота яман шеш күҙәнәктәрен булдырмай. Ыҫланған, майлы ризыҡтар ашағандан һуң ҡурай еләге ҡайнатмаһы менән сәй эсеп ҡуйһағыҙ, организмға уларҙың зарарлы тәьҫирен түбәнәйтәһегеҙ, ти диетологтар. Ҡурай еләгендәге баҡыр тиренең төҫөн матурайта, унын һығылмалылығын яҡшырта, шулай уҡ кәйефте күтәрә. Ҡыҙыл емештән әҙерләнгән ҡайнатма бөйөр, бауыр, эсәк-ашҡаҙан ауырыуҙарынан файҙалы. Матдәләр алышыныуы боҙолғанда, ангина ҡалҡҡанда, һалҡын тейгәндә ҡыҙыл ҡайнатмаһы ашағыҙ. Абрикос ҡайнатмаһы ауырлы ҡатындарға, йөрәк сирлеләргә килешә. Еләк ҡайнатмаһы ҡанды яҡшырта, организмды йод менән тулыландыра. Баш ауыртыуы менән яфаланһағыҙ, әстерхан сәтләүегенән ҡайнатма яһағыҙ.

■ Сәстәрҙе шампунь менән йыумаһаң, улар менән нимә буласаҡ? Канада журналисы Дайан Питерс ошо һорауға яуап табыу маҡсатынан эксперимент үткәреп ҡараған. Шампунь һәм кондиционерҙағы ҡайһы бер матдәләр гормональ үҙгәрештәргә килтерә, тип иҫәпләй ғалимдар. Һөт биҙҙәре яман шешенең барлыҡҡа килеүендә лә косметик сараларҙың ҡыҫылышы бар икәне билдәле. Көн һайын йылы һыу менән сәстәрҙе йыуыу уларҙы төҫһеҙләндерә. Етмәһә, сәстәрҙе йыуыу, уларҙы киптереү, төрлө майҙар һөртөү ваҡытты ла ала. Көн һайын сәс йыуыуҙан баш тартыу уларҙы күпкә сәләмәтерәк итә, ти журналист.

■ Сәй ни тиклем осһоҙораҡ, унда шул тиклем фторлы берләшмәләр күберәк. Дерби университеты төрлө фирмалар етештергән сәйҙең төрлө сорттарын тикшереп, ошо фекергә килгән. Фторҙы ҙур күләмдә ҡулланыу организмға етди зыян килтерә. Иң тәүҙә был тештәр менән һөйәктәрҙең торошонда сағыла. Организмда фтор норманан артыҡ булһа, тештәрҙә ҡара тап барлыҡҡа килә. Шулай уҡ пакетлы сәйҙәр эсеүҙән баш тартырға кәрәк, ти белгестәр.

■ Көндөң торошона ҡарамайынса, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡулдары һәм аяҡтары гел өшөй. Табиптар белдереүенсә, һалҡын ҡул-аяҡтар гормондар тәьҫире һөҙөмтәһе. Тире аҫтында урынлашҡан күҙәнәктәр температура үҙгәреүен һиҙгер тоя. Һауа торошо һыуынған һайын, капиллярҙар аша күберәк ҡан ҡыуыла, шулай итеп, тире гел генә уңайлы температурала була. Ҡатын-ҡыҙҙар тәненең температураһы эстраген гормонына, ә эстраген күрем циклы менән тығыҙ бәйле. Һыуыҡ булғанда күҙәнәктәр капиллярҙарға ҡанды күберәк ҡыуа һәм мөһим ағзаларға етерлек күләмдә ҡан бармай. Иң ҡыҙығы, ҡатын-ҡыҙ өшөгәндә унын ҡул суҡтарына һәм аяҡтарына ҡыуылған ҡан күләме минутына 0,02 литрҙан артмай, ир-егеттәрҙә был һан минутына 2-3 литрға етә. Шулай итеп, гүзәл заттың ҡулдары менән аяҡтары мөһим ағзаларҙың иҫәбенә үҙенең "өлөшөн" бирә булып сыға. Шуға ла ҡулдарығыҙ гел өшөп йөрөй икән, быға борсолорға ярамай, быны тәбиғәт үҙе шулай итеп яйлаған.

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

**Хәйбулла районы халҡы быйыл бренд булыуға дәғүә итерлек байрамдар уйлап сығарып, уларҙы матур итеп ғәмәлгә ашырырға әүәҫләнеп алды. Быны, һис шикһеҙ, Мәҙәниәт йылының иң сағыу ваҡиғаһы, тамашаһы тип баһаларға булалыр. Район хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлеге белгесе Роза Рәсембәтова әйтеүенсә, башлыса мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре һәм ауыл ағинәйҙәре инициативаһы менән ойошторолған бындай саралар башҡа бер районда ла үткәрелгәне булмауы менән үҙенсәлекле. Мәҫәлән, ошо арала ғына Степной ауылында - картуф байрамы, Аҡназарҙа - ашҡабаҡ, Һаҡмар-Наҙарғолда - ҡорот, Ҙур Арыҫланғолда - ҡамыр, Әбүбәкерҙә - тәгәрмәс, Подольскийҙа - яулыҡ, Быҙаулыҡта - яҫтыҡ, Иләстә - ситән, Яңы Ергәндә - балсыҡ, Мәмбәттә һарыҡ йөнө ҡырҡыу байрамы уҙған. "Был саралар ауыл халҡын үҙ көнитмешен яҡшыртыуға әүҙемләштерә, үҫеп килгән быуында хеҙмәткә хөрмәт тәрбиәләй", тип раҫлай ойоштороусылар. Ул байрамдарҙың бер нисәүһен генә һүрәтләп үтәйек.**

# ХӘЙБУЛЛАҒА БАРЫП КҮРЕГЕҘ...

## ата-бабалар көнитмешен сағылдырған тамашаларҙы



### Ашҡабаҡ байрамы

Аҡназар ауылы өсөн ашҡабаҡ байрамы брендлы сара буларaҡ үткәрелде. Ысынлап та, был ауылда ашҡабаҡ күпләп үҫтерелә. Аҡназарҙар, күрәһең, ашҡабаҡтың кеше организмы өсөн бик файҙалы булыуын, унда C, E, B1, B2, PP витаминдары, калий, кальций, тимер, магний, баҡыр, цинк, кобальт, кремний, фтор матдәләре тупланыуын, уны йөрәк-ҡан тамырҙары, әҙҡанлылыҡ һәм һимереү кеүек ауырыуҙарға ҡаршы ҡулланып булыуын башҡаларға ҡарағанда яҡшыраҡ белә.

Бына беҙ тулҡынланып Аҡназар ауылына "Ашҡабаҡ байрамы"на йыйылдыҡ. Тулҡынланып, тинем, сөнки бындай сараны әле ҡайҙалыр үткәргәндәрен ишеткән юҡ ине әле. Ауылға инеп, байрам уҙған Ишкилдиндар ихатаһына йүнәлдек. Ҡапҡа алдында беҙҙе оло йәштәге ағинәйҙәр йыр-бейеү менән ҡаршы алды һәм яңы бешерелгән ашҡабаҡтан ауыҙ иттерҙе. Ишек алдында ауыл уңғандары тураһында фотостенд ҡарағандан һуң, өйөлөп ятҡан ашҡабаҡтар күргәҙмәһе янына йүнәлдек. Унда йәшелсәнән әҙерләнгән төрлө ашамлыҡтар: манты, бәлеш, ҡоймаҡ, бутҡа, рагу, хатта ашҡабаҡтың шифалы һуты ла бар ине. Ауыл ағинәйҙәре үҙ ризыҡтарынан ауыҙ иттереп, бешереү ысулдары менән уртаҡлашты, йырҙар йырлап, таҡмаҡтар әйтте.

Артабан йорт хужаһы Шәрифулла Сәйфулла улы картуф, помидор, ашҡабаҡ һәм башҡа йәшелсәләр үҫтереү серҙәре менән уртаҡлашып, ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап бирҙе. "Йыл һайын, Аллаға шөкөр, баҡсанан уңышты мул алабыҙ, - тине ул. - Быйыл бигерәк тә помидор, картуф, ашҡабаҡ уңды, 300-ҙән ашыу баш ашҡабаҡ йыйып алдыҡ. Уңышты ауыл халҡына, район үҙәгендә уҙғарылған йәрминкәгә лә алып барып һатам, ҡош-ҡортҡа ла ашатабыҙ, мал һимертәбеҙ".

Жюри ағзалары байрамға йомғаҡ яһап, ашҡабаҡ ризыҡтары хужабикәләре: Гөлсимә Ишкилдина, Тәслимә Шәрипова, Зөһрә Килдебаева һәм Зилә Тәүелбаеваларҙы еңеүсе итеп билдәләп, уларға һәм Ишкилдиндар ғаиләһенә Маҡтау ҡағыҙҙары, иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙы. "Был байрам нисек уйлап сығарылды?" тигән һорауға уны ойоштороусыларҙың береһе ауылдың клуб мөдире Нурзилә Ишҡыуатова шулай тине:

- Йәйгеһен "Япраҡ байрамы" ойошторорға тип йыйынып йөрөгәнсе, йәй үтте лә китте. Шунан комиссия төҙөп, ауыл буйлап йөрөп сыҡтыҡ. Халыҡта ашҡабаҡтың күп булыуын иҫәпкә алып, ашҡабаҡ байрамын үткәрергә булдыҡ. Иң күп уңыш Ишкилдиндар ғаиләһендә булғас, сараны уларҙың ихатаһында уҙғарҙыҡ. Сараны уҙғарыуҙа ярҙам иткәндәре өсөн ауылдың ағинәйҙәренә, бигерәк тә Фәниә Килдебаева һәм Зөлфиә Шәриповаға рәхмәтлемен.

### Ҡорот байрамы

Әбеш ауыл биләмәһенә ҡараған Һаҡмар-Наҙарғол ауылында халҡыбыҙҙа иң ҡиммәтле һәм сихәтле һаналған ҡоротҡа оло хөрмәт йөҙөнән ҡорот байрамы үткәрелде. Брендлы байрам исеменә дәғүә итеүсе үҙенсәлекле сарала ауылыбыҙҙың бала-сағаһынан алып, бөтә быуын кешеһе ҡатнашты, бер кем дә ситтә ҡалманы.

Ағинәйҙәр һәм башланғыс мәктәп уҡыусылары район үҙәгенән килгән ҡунаҡтарҙы, комиссия ағзаларын ауылыбыҙҙың иң күркәм йорттарының береһе һаналған Әминә һәм Дауыт Юнысовтар ихатаһына саҡырҙы. Ихата түрендә шәхси эшҡыуар Ғәфүрйән Ятраҡоловтың сағыу, матур тирмәһе урын алған. Тирмә янында - "Һыйлы көнөң һыйырҙа" тип исемләп, һөт ризыҡтарынан күргәҙмә әҙерләнгән. Ниндәй генә төр ашамлыҡтар юҡ унда! Шулай уҡ ҡорот һәм эремсектән торған айырым өҫтәл дә



***✓ Һарыҡтың ите, йөнө, тиреһе - барыһы ла файҙалы. Борон йөндән кейеҙ баҫып, тирмә ҡорғандар, кейем теккәндәр. Йәш килендәрҙең бирнәһендә һарыҡ йөнөнән эшләнгән зиннәтле балаҫтар булһа, егеттәр ҡалымға һарыҡ биргән.***

бик бай биҙәлгән. Ә усаҡлыҡ янында Зәкирә Юнысова (78 йәш) һөттөң ҡоротҡа әүерелеү - ҡатыҡ ойотоу, уны әсетеү серҙәрен, ҡаҙанда эркет ҡайнағас, япраҡлы сейә сыбығы һалып, ҡоротҡа үҙенсәлекле тәм биреләүен, ҡоротто төйөрһөҙ итеү өсөн ҡайнатҡанда йыш болғатып торорға кәрәклеген тәмләп-тәмләп һөйләне. Ә уның ейәнсәре Наҙгөл барыһын да өйрәнеп ҡалырға тырышҡандай, ҡартәсәһенең янында бөтөрөлдө.

Ике килендәш Фәнирә һәм Фирҙәүес Ятраҡоловалар эркетте һыуытып, ҡорот моҡсайына ҡойоп, һарҡытырға ҡуйҙы һәм: "Эркет һыуы организмды ҡом-таштарҙан таҙарта, эсәк буйындағы паразиттарҙы бөтөрә, сәстең ҡауағын, баш ҡысынмаһын дауалай, сәсте үҫтерә, кальцийға бай булыуы сәбәпле, ҡош-ҡорт аҙығына ҡушып бирһәң, улар тиҙерәк үҫә, ауырыуға ҡаршы тороусанлығы арта, шулай уҡ икмәк ҡамырына ҡушһаң да дауа була", - тип һөйләй-һөйләй, ҡоротҡа тоҙ өҫтәп, тасҡап, йомғаҡларға тотондо. Ә Әминә Юнысова (башланғыс мәктәп етәксеһе) ҡоротто талдан үреп эшләнгән ылашҡа киптерергә теҙеп ҡуйҙы һәм киптерелгән ризыҡтың файҙаһы тураһында бәйән итеп: "Элекке заманда ир-егеттәр яуға сыҡҡанда кипкән ҡоротто моҡсайҙарына һалып, аҙыҡ урынына биреп ебәрер булғандар. Ҡоротта *C* витамины, кальций, магний һәм башҡа көс-ҡеүәтте һаҡлаусы матдәләр күп. Башҡорттарҙан башҡа ҡаҙаҡ, монгол, ҡырғыҙ, төркмән һәм башҡа милләт кешеләре лә ҡоротто бик яратып ҡуллана", - тине. Һөйләүҙәрҙән тағы шул мәғлүм булды: элегерәк, дарыуҙар етешмәгән саҡта, күгәргән ҡороттоң үңәҙен яраға баҫҡандар, һыуға болғап эскәндәр. Ә киң билдәле пенициллин ана шул ҡорот үңәҙен файҙаланыуҙан барлыҡҡа килгән дә инде.

Ауыл ағинәйе Мөбинә апай Искәнйәрова (78 йәш) ҡоротҡа арналған һамағын да уҡып ишеттерҙе:

*Әгәр ауырып китте ниһәм,*
*Һис аптырап тормайым:*
*Май, ҡорот, тоҙ, боросто*
*Ҡайнар һыуға болғайым.*
*Бисмилла итеп эсәм дә*
*Ятам юрған уранып.*
*Ә иртәнсәк тороп китәм*
*Һауыҡҡанға ҡыуанып.*
*Ҡоротто изып эсеү*
*Борондан ҡалған дауа.*
*Ҡорот менән дуҫ булһаң,*
*Һаулығың да ныҡ була!*

"Ҡоротбикә" костюмындағы Раушания Мөхәмәдйәнова ҡунаҡтарға ҡоротло һурпа ауыҙ иттерҙе, балалар ҡорот эшләүсе өләсәй-ҡартәсәйҙәренә маҡтау йырҙары йырлап-бейеп өйөрөлдө. Ағинәйҙәр төркөмөнөң гармун моңона яйса ғына баҫып бейеүҙәре байрамға бер йәм өҫтәне. Ә йәшерәк килендәр, һеңлеләр ҡоротҡа тартылған сейә, муйыл, ҡарағат, йөҙөм ҡушып, йомарлап, бай табын әҙерләне. Сара һуңында ҡорот һатып иң күп килем алыусы Фәнирә һәм Фирҙәүес Ятраҡоловаларға махсус приздар һәм Маҡтау ҡағыҙҙары тапшырылды.

## Һарыҡ йөнө ҡырҡыу байрамы

"Мәмбәттәр һарыҡ йөнөн ҡырҡыу йолаһын күрһәтә икән", тигән хәбәрҙе ишетеү менән тәғәйен ауылға юлға сыҡтыҡ. Өмә үтәсәк йортто табыуы ҡыйын булманы: төрлө төҫтәге шарҙар менән биҙәлгән ҡапҡа алдында ауылдың күрке булған "Туржы ынйылары" ансамбле ағинәйҙәре йыр-бейеүҙәр менән ҡунаҡтар көтә ине.

Һарыҡ ҡырҡыу йолаһы ауылдың абруйлы ғаиләһе Фәнүзә һәм Әхмәҙулла Мәмбәтовтарҙың йортонда үтә булып сыҡты. Алсаҡ күңелле һәм эшһөйәр хужалар ауылдың иң хөрмәтле ғаиләләренең береһе. Улар икеһе лә ошо ауылда тыуып-үҫеп, белем алып, өйләнешеп, тыуған ерҙә төпләнгән. Фәнүзә Ҡасим ҡыҙы Сибай медицина училищеһын тамамлап, бөгөнгө көнгә тиклем фельдшер булып эшләй. Тормош иптәше Әхмәҙулла Әхмәҙей улы ла уңған уҙамандарҙың береһе. Совхоз тарҡалғас, крәҫтиән-фермер хужалығы ойоштороп, бөгөнгө көндә игенселек һәм малсылыҡ менән шөғөлләнә. Бәхетле хужалар өс баланы үҙаллы тормош юлына баҫтырып, дүрт ейән-ейәнсәрҙәрен ҡунаҡҡа көтөп ала.

Бына уларҙың ҡотло йорт ихатаһында ҡатын-ҡыҙҙар ҡулдарында ҡайсыларын уйнатып, һарыҡ ҡырҡыу менән мәж килә. Ауылдың ағинәйе Ғилминур апай дәррәү эшкә фатиха биреп: "Килендәр, һарыҡты башынан башлап ҡырҡһаң - бәрәсе орғасы, ҡойроҡ яғынан башлаһаң - тәкә була, тиҙәр. Малды үрсетәм тиһәгеҙ, башынан башлағыҙ", - тине. Иң уңған килендәрҙең береһе Эльвира Мәмбәтова тәүге һарыҡты ҡырҡа башлап: "Үҙем ҡырҡҡан һарыҡҡа бына ошо матур епте бәйләп ҡуяйым әле, минең ҡулым бәрәкәтле булһын, ҡышҡылыҡҡа игеҙ бәрәсләп бирһен", - тип юраны. Ә өмәселәрҙең береһе ул һалған йөндө үлсәп ҡарай һалып: "Хужаларға афарин, һарыҡтарҙы яҡшы ҡараған - 4 кило тартты!" - тине. Артабан ағинәйҙәрҙең дәртле таҡмаҡтары менән эш тағы ла әүҙемерәк дауам итте.

- Бөгөнгө көндә барлығы 70-80 һарыҡ аҫрайым. Улар араһында Романов һәм Эдильбай тоҡомло һарыҡтар бар. Былтыр Романов тоҡомло һарыҡтарҙың береһе дүрт бәрәс килтерҙе, күпселеге игеҙәк бәрәсләй. Ҡалғандары - ябай ауыл һарыҡтары. Һарыҡсылыҡ менән күптән шөғөлләнәм. Элек хужалыҡ булған саҡта бийма, кейеҙ баҫа торғайным. Хәҙер генә өлгөрөп булмай, - тине йорт хужаһы Әхмәҙулла ағай.

Өмәселәр йырлап-гөрләп һарыҡ ҡырҡҡан арала, йорт эсендә лә эш ҡыҙыуланы. Ағинәйҙәрҙең кемеһелер йөн тетә, икенсеһе иләй-сирата, өсөнсөһө бәйләмгә тотонған. Ошонда уҡ йөндән эшләнгән кейеҙ, балаҫ, бийма, ойоҡбаш-бейәләй, толоп, тун, баш кейеме һәм башҡаларҙан күргәҙмәләр ҡуйылған. Беҙ инәйҙәрҙән һарыҡ йөнөнөң файҙаһы тураһында ла күп мәғлүмәт ишеттек. "Һарыҡтың ите, йөнө, тиреһе - барыһы ла файҙалы. Борон йөндән кейеҙ һәм тула баҫып, тирмә ҡорғандар, кейем теккәндәр. Йәш килендәрҙең бирнәһендә һарыҡ йөнөнән эшләнгән зиннәтле балаҫтар булһа, егеттәр ҡалымға һарыҡ биргән. Тиреһе дауа өсөн ҡулланылған, йәғни һалҡын тейҙергән кешене яңы һуйылған һарыҡ тиреһенә урап һалғандар, эс майын иретеп эсергәндәр, тәненә япҡандар. Сайырлы һарыҡ йөнөн быуындар һыҙлағанда бәйләгәндәр, баш ауыртҡанда мендәр эшләп яҫтанғандар", - тине Анфиса һәм Камила апайҙар. Хәмиҙә инәй йөн иләү тәртибе тураһында һөйләһә, Рәхимә инәй иһә һарыҡ йөнө тултырылған ҡорамыштан еңел, ҡупшы түр юрғаны эшләп күрһәтте.

Һарыҡ йөнөн ҡырҡыу өмәһе барлыҡ йолаларҙы теүәл башҡарып, юғары кимәлдә үтте. Өмәселәрҙең теләк-фатихалары һәм еңел ҡулы менән эш ырамлы һәм дәртле барҙы.

**Азат БОХАРБАЕВ.**
**Рәшиҙә СӘЙФУЛЛИНА.**
**Мәрйәм ИМАНҒОЛОВА.**

**РЕДАКЦИЯНАН...**

**Был байрамдар тураһындағы юлдарҙы уҡығас, ни уйланың икән, уҡыусы? Моғайын, һәр берегеҙ ата-бабаларыбыҙҙың борон-борондан бына шулай көн иткәнен, бихисап хеҙмәт төрҙәрен төп шөғөлөнә әйләндереп, ризыҡлы ла, кейемле лә булыу форсатына өлгәшеүен иҫенә төшөргәндер. Һәм тағы... Был гүзәл тамашаның ойоштороусылары, дәртләндереүселәре кем, тигән һорау ҙа тыуғандыр. Хәйбулла районы хакимиәтенең мәҙәниәт идараһы етәксеһе Лариса Рәшит ҡыҙы Мәмбәтова һәм ошо уҡ идараның хеҙмәткәре, район "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Миңзифа Ибраһим ҡыҙы Ишемғолова башында тора бындай сараларҙың. Улар ауыл ағинәйҙәренең һәр фекерен элеп алып, ул фекерҙе сағыу бер тамашаға әйләндерә һала. Был юлы иһә улар барыһынан да уҙҙырҙы: райондың һәр ауылы өсөн бренд булып ҡаласаҡ үҙ байрамдарын булдырыуға өлгәште. Ғөмүмән, ата-бабалар көнитмешен күҙаллатып, тормош дилбегәһен үҙ ҡулыбыҙға алырға ваҡыт, тигән һығымта яһатҡан хәйбуллаларға рәхмәт уҡырға ғына ҡала.**



УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

**Башҡаларға хеҙмәт итергә әҙерлек: алға барыу өсөн, башҡаларҙы алдан үткәр**

● **Үҙ инициативаһы менән башҡаларға хеҙмәт итә.** Әгәр мәжбүр итәләр икән, һәр кем башҡаларға хеҙмәт итәсәк. Әммә кем башҡаларға йөрәге ҡушыуы буйынса, үҙ теләге менән хеҙмәт итә, уларҙа ғына һеҙ саф күңел күрерһегеҙ. Бөйөк лидерҙар башҡаларға хеҙмәт итеү ихтыяжын тоялар, алмашына нимәгәлер өмөт итмәйенсә генә ошо бурысты үтәйҙәр.

● **Биләгән вазифаһына иҫе китмәй.** Башҡаларға хеҙмәт итергә әҙер лидерҙар вазифаға йәки биләгән дәрәжәһенә иҫе китмәй. Һуғышта мина яланына ингән хәрби етәксе бары тик башҡаларға ярҙам итеү хаҡында уйлай, уны үҙенең дәрәжәһе ҡыҙыҡһындырмай һәм ул шундай уҡ ябай кеше булып ҡала. Лидер булыу бары тик уға ҡыйыулыҡ өҫтәй, башҡаларға хеҙмәт итеү бурысын нығыраҡ тойорға ярҙам итә.

● **Мөхәббәт аша ярҙам итә.** Башҡаларға хеҙмәт итергә теләү тышҡы хәл-торош йәки үҙ-үҙеңде инандырыу аша дәртләндерелмәй. Ул мөхәббәт менән һуғарыла. Ахырҙа, һеҙҙең башҡаларға йоғонто яһау дәрәжәһе улар тураһында хәстәрлек күреү кимәле менән баһалана. Шуға күрә лидерҙар өсөн башҡаларға хеҙмәт итеү теләге асылдан, булмыштан килеүе мөһим.

● **Уйланырға мәжбүр итеүсе һорауҙар.** Башҡаларға хеҙмәт итеү тураһында һүҙ сыҡһа, йөрәгегеҙҙә ниндәй кисерештәр тыуа? Ниндәйҙер ташламалар йәки файҙа өсөн генә лидер булырға теләйһегеҙме? Әгәр һеҙ, ысынлап та, артынан башҡалар эйәрергә әҙер лидер булырға теләһәгеҙ, бары тик үҙегеҙҙең, хеҙмәт итергә әҙерменме, түгелме, тигән шәхси проблемағыҙҙы асыҡларға ғына кәрәк. Әгәр башҡаларҙың үҙегеҙгә хеҙмәт итергә тейешлеген маҡсат итеп ҡуйһағыҙ, шундай кәңәштәр: кешеләр менән идара итеүҙе туҡтатып, уларҙы тыңлай башлағыҙ; карьера баҫҡысына үрләр өсөн генә тырышыуығыҙҙы туҡтатып, башҡаларҙы хәстәрләгеҙ; бөйөктәр ысын мәғәнәһендә үҙҙәрен кеселекле, бөтөн кешеләрҙең хеҙмәтсеһе итеп тоя икәнен хәтерҙә тотоғоҙ.

**Өйгә эш. Үҙегеҙҙе башҡаларға хеҙмәт итеүгә әҙерләү өсөн, түбәндәгеләрҙе эшләгеҙ:**

● Бәләкәй эштәр башҡарығыҙ. Үҙегеҙҙең яҡындарығыҙҙан башлағыҙ. Бөгөн үк улар тураһында хәстәрләгән ғәмәлдәр ҡылығыҙ.

● Күмәк кеше баҫып торғанда улар араһынан аҡрын ғына атлап, һәр береһе менән аралашып үтергә өйрәнегеҙ. Һөйләшкән кешегеҙгә иғтибар туплағыҙ, уның ихтыяжын, маҡсаттарын һәм теләктәрен белергә тырышығыҙ. Һуңынан иһә ул кешеләр өсөн ниндәйҙер яҡшылыҡ эшләүҙе планлаштырығыҙ.

● Ярты йыл буйына башҡаларға изгелек ҡылығыҙ. Әгәр ошо ваҡыт эсендә ҡуйылған көйләнешегеҙ илһамландырмай икән, был ғәмәлде йөрәгегеҙҙә йылылыҡ барлыҡҡа килгәнсе ҡабатлағыҙ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 27 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.05 "Мужское/Женское".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Григорий Р.". 1-я и 2-я серии. Историко-биографический сериал (16+).
23.25 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Мотель Бейтс". Сериал (16+).
02.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
04.00 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Кузькина мать. Итоги". "БАМ-молодец!"
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Каменская-6". "Городской тариф". Детективный сериал. 2-я серия (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
